ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

30-5 июль - август (майай - урағай) 2022

№30 (1020)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иректе

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Юл ҡоймалары... ҡыуаҡтар менән алмаштырыла 5



Инфаркттан йүгереп "ҡасып" буламы? 8-9



Миҙгел ябылды, йәшәһен яңы миҙгел! 11



Бына ошо физаҡәрҙәр... башҡорт рухына ҡанат ҡуя 12-13



ТВ-программа 14

*Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Шулай итеп, гәзит-журналдарға яҙылыуҙың бер миҙгеле тамамланды, икенсеһе башланды: июлдән алып 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 718 һум 98 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

АФАРИН!

## ҺӘР САҠ ҮҘ КӨСӨҢӘ... үҙ белемеңә генә ышан!



**Республика Башлығы Радий Хәбиров ошо көндәрҙә Башҡортостан Спорт министрлығының 100 йыллығын билдәләү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Беҙ оло быуын спортсылар менән дә, уларға алмашҡа үҫеп килгән йәштәребеҙ менән дә лайыҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ. Мәҫәлән, апрелдә Ижау ҡалаһында өс (17, 20 һәм 27 йәшкә тиклем) йәш төркөмөндә халыҡ-ара шашка буйынса Рәсәй беренселеге уҙҙы. Турнирға илебеҙҙең 12 төбәгенән 100 шашка оҫтаһы йыйылды. Башҡортостан командаһы өс программа буйынса ла өсөнсө урын яуланы. Ә бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Айгизә МӨХӘМӘТЙӘНОВА, сығарылыш синыфында уҡып, имтихандарға әҙерләнһә лә, классика һәм блиц программаһы буйынса чемпион исеменә лайыҡ булып, команда еңеүенә ҙур өлөш индерҙе. Яуаплы мәлдә уны борсомайыҡ, тип, осрашыуҙы ошо көндәргә ҡалдырғайныҡ һәм, ниһайәт, уның менән әңгәмәне гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

(Дауамы 9-сы биттә).

БАШ ҠАЛАМ

## ВЕЛОСИПЕДТА ЙӨРӨЙБӨҘ!



**Өфө күҙгә күренеп үҙгәрә. Был фекергә хатта һәр саҡ ниндәйҙер етешһеҙлектәр эҙләп, бөтә нәмәнән ҡәнәғәтһеҙ йөрөгәндәр ҙә ҡаршы килмәҫ. Баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейы алдынан да байтаҡ эштәр башҡарылып, ҡалабыҙ тағы ла матурайып, бөтәйеп, күркәмләнеп ҡалыр, тип ышанам.**

Өфө миллионлы ҡала, ҙур ҡала. Бигерәк тә ҡалаға тәүгә аяҡ баҫҡан кеше өсөн ул икһеҙ-сикһеҙ булып тойола. Шулай ҙа бында даими йәшәүселәр Өфөнөң урынлашыуы яғынан бик уңайлы икәнен белә, шуға күрә йәйге киске һалҡында ла, ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла йәйәү йөрөүселәр күп урамдарҙа. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ велосипедта елдереүселәр күҙгә күренеп артты. Әйтергә кәрәк, улар өсөн махсус юлдар ҙа булдырылған. Әлбиттә, был йәһәттән эшләйһе эштәр байтаҡ, ләкин велосипедта йөрөүселәр артҡан һайын, уларға уңайлыҡтар булдырыу йәһәтенән дә эштәр бермә-бер шәбәйер. Быға ҡалала йыл да уҙғарылған "1000 велосипедсы" көнө лә булышлыҡ итер, тип ышанам.

(Дауамы 2-се биттә).

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

## БАЛЫҠСЫ БУЛ!

**Ер йөҙөндәге тереклектәрҙең 50 процентын балыҡтар тәшкил итә. Бөгөнгө көндә балыҡтарҙың 32 мең 384 төрө билдәле.**

Намаҙҙа торғандағы кеүек, балыҡ ҡармаҡлағанда кеше үҙенең тәбиғи асылында була һәм тән, йән тыныслығы кисерә. Халыҡ телендә балыҡ ҡармаҡлауҙа үткән ваҡыт йәшәгән ғүмер иҫәбенә ҡушылмай, тигән фекер бар. Сөнки балыҡ ҡармаҡлағанда аң хәтер кәштәһенең төпкөл мөйөштәрен уятып, мейене йәшәү өсөн мөһим булмаған сүп-сарҙан азат итә, урыҫса әйткәндә, "перезагрузка" эшләй.

Балыҡ ҡармаҡлағанда кешенең аң донъяһы ял итеп, яңы мәғлүмәт үҙләштереү, фекерләү даирәһен киңәйтеп, һаулығына зыян килтергән хәүеф-шомдан таҙара.

Балыҡ тотоусыларҙың барыһы ла тигеҙ. Балыҡҡа кемдең ниндәй машинала килеүе, ниндәй дәрәжәлә йәки вазифала булыуы шарт түгел.

Ямаулы күлдәк-ыштан кейгән ағас ҡыуаллы малайға ла, затлы ҡыуал тотҡан, баштан-аяҡ яңы камуфляжға кейенгән кешегә лә балыҡ йә ҡаба, йә юҡ.

Балыҡты һайлап тотоп булмай. Нимә ҡаба, шуға риза булаһың. Бер кемдең дә һыуға инәү һалып ебәргән балығы юҡ.

Яр башындағы балыҡсының да, һыу аҫтындағы балыҡтарҙың да уңышҡа мөмкинлектәре тигеҙ. Кем кемде һайлағаны билдәһеҙ. Балыҡсы балыҡтымы, балыҡ балыҡсыны ҡармаҡлаймы икәнен әлегә бер кем дә иҫбат итмәгән.

Балыҡ ҡармаҡлауҙа яһалмалыҡ юҡ. Унда кеше һәр ваҡыт ысынлап та үҙе булып ҡала.

Балыҡты ҡармаҡлауға ла, таҙалауға ла, ашауға ла хәтһеҙ сабырлыҡ, оҫталыҡ, әүҙемлек кәрәк.

Йәштәр, ғаиләгеҙ, балаларығыҙ менән балыҡҡа йөрөгөҙ. Балыҡҡа йөрөү балаларҙы егәрлеккә, әрһеҙлеккә, түҙемлеккә өйрәтә.

**Урал МОСТАФИН.**

12+

✓ Ябай бүкәндән һәм ултырғыстан айырмалы рәүештә, кресло зыр әйләнә һәм һин үҙеңә табан йүнәлгән административ "уҡтарҙан" тайпылырға ла өлгөрәһең, имеш. Бына ни өсөн биләгән вазифаны "кресло"ға тиңләйҙәр икән дә...



БАШ ҠАЛАМ

# ВЕЛОСИПЕДТА ЙӨРӨЙБӨҘ!

**(Башы 1-се биттә).**

Күптән түгел баш ҡала буйлап велосипедта туристик маршрут булдырыуҙы күҙаллаған һәм велосипедсылар өсөн булдырылған шарттарҙың ниндәй кимәлдә икәнлеген тикшереү маҡсатынан беренсе сара уҙғарылды. Махсус эксперттарҙан торған команда Өфөнөң Рус драма театрынан старт алып Телеүҙәккә тиклем юл үтте. Уларҙың маршруты Октябрь проспекты, Володарский майҙаны, Октябрҙең 50 йыллығы, Революцион, Ленин урамдары, Каруанһарай һәм Пушкин урамы буйлап үтте. 2 сәғәт эсендә 10 саҡрым юл үтте велотурҙа ҡатнашыусылар.

Маршрут аҙағында улар үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашып: "Ҡыҙыҡлы һәм матур урындарҙы уҙҙыҡ, ләкин туристик маршрут булдырыу өсөн эшләйһе эштәр бар. Мәҫәлән, "Мир фирмаһы" эргәһендәге велосипед юлының ҡап уртаһында реклама экранына осраныҡ. Урыны-урыны менән бейек бордюрҙар ҡамасаулай. Шулай уҡ велосипедсылар тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк. Күпселек ҡәҙимгә ҡағиҙәләрҙе белмәй, юлды аша сыҡҡанда велосипедтарынан төшмәйенсә уҙып китә. Велосипедта йөрөү мәҙәниәтен үстерергә һәм ҡала халҡын автомобилдән велосипедҡа күсеп ултырырға ҡыҙыҡһындырыу кәрәк. Өфөнөң велотуристарҙы йәлеп итерлек бөтә мөмкинлектәре лә бар", - тине.

Әлегә Рәсәйҙең бер ҡалаһында ла туристик веломаршрут юҡ икән. Әгәр ҙә Өфөлә ошо ниәтте атҡарып сыға алһалар, республиканың баш ҡалаһы миллионлы ҡалалар араһында ошондай үҙенсәлекле туристик маршруты булған берҙән-бер ҡала буласаҡ. Белгестәр фекеренсә, Өфөнөң велотуристар үҙәге булып китеү өсөн тағы бер үҙенсәлеге - уның байтаҡ оҙонлоҡҡа һуҙылған булыуы.

Үҙемдең шәхси күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйткем килә: велосипедта йөрөргә яратыусылар өсөн иң яҡшы шарттар Октябрь проспекты урамында булдырылған, шулай уҡ Октябрҙең 50 йыллығы урамында ла махсус урындар билдәләнгән. Ләкин Үҙәк баҙар тирәһендә улар бөтә һәм артабан, ниндәй урам буйлап киткәндә лә, велосипедсыларға йәйәүлеләрҙән һүҙ ишетә-ишетә улар менән бергә барырға тура килә. Нимәгә игтибар иткәнем бар, ҡайһы бер йәйәүлеләр махсус булдырылған юлдан китеп барыусы велосипедсыны әрләп ҡала, улай ғына түгел, уның юлынан бара һәм үҙенә лә хәүеф, ике тәгәрмәс хужаһына ла уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Ә бына велосипедсылар башлыса үҙҙәренә тәғәйенләнгән махсус юлдан ғына йөрөүҙе хуп күрә.

Велосипедта йөрөү экологик йәһәттән дә зарарһыҙ, кешенең һаулығы өсөн дә яҡшы. Шуға күрә активистарҙың Өфөнө велотуристар үҙәге итергә тырышыуҙары тормошҡа ашыр һәм баш ҡалабыҙ буйлап махсус билдәләнгән көндә генә түгел, ә көн һайын меңәрләгән велосипедсылар елер, тип ышанам.

**Зөлфәр АҠҠУЖИН.**

БЫЛ АЙҘА

# ЙӘЙ ҠӘҘЕРЕ - ЕР ҠӘҘЕРЕ



**Ваҡыт - аҡҡан һыу кеүек, әле генә һөтай ҙа майай тип ҡыуана инек - күҙ асып йомғансы урағай ҙа килеп етте. Һөйөнөргәме, көйөнөргәме быға? Йәй ғүмере бигерәк ҡыҫҡа шул: танһыҡ та ҡанманы, күргәндәй ҙә булманыҡ түгелме?**

Әйткәндәй, ваҡыттың, айырыуса һуңғы йылдарҙа, күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә сабыуы беҙҙе - ябай кешеләрҙе генә түгел, ә рәсми фән әһелдәрен дә ҡыҙыҡһындыра һәм уйландыра икән.

**Уларҙың фекеренсә, тәүлек оҙайлығы бөгөн кешегә элеккесә 24 түгел, ә 16 сәғәткә бәрәбәр. Ғалимдар, ысынлап та, Ер шарының "пульсы" үҙгәреүен иҫбат иткән, тиҙәр: меңәр йылдар буйы ул тотороҡло килеп, секундына 7,8 такт тәшкил иткән булһа, 1980 йылдан Ерҙең "йөрәк тибеше" йышая барып, бөгөнгә көнгә 12 тактҡа еткән, имеш. 1930 йылдарҙа йәшәгән Козырев тигән профессор ваҡыттың энергияға әүерелеү теорияһы менән билдәле һәм уның фекеренсә, Ҡояш системаһы үҙенең әйләнеш тиҙлеген үҙгәртеү сәбәпле, ваҡыт оҙайлығы ла үҙгәрә һәм ул шәберәк һеүләй башлай.**

Ер шарының тирбәлеү кимәле артыуы хаҡында билдәле башҡорт космоэнергетигы һәм халыҡ табибы Рауфан Мортазин да үҙенең "Мөғжизәләр заманы" тигән китабында яҙып сыҡҡайны. Заман тиҙлегенә тәьсир итеүсе факторҙар, сәбәптәр күп төрлө, был үҙе бер айырым тема, ә ваҡыт көтмәй: беҙ ғүмер ағышын әкренәйтә алмайбыҙ, үә ләкин уның һәр минутының ҡәҙерен белеп, мөмкин тиклем файҙалы һәм ҡыҙыҡлы, яҡындарыңа ҡыуаныс булырлыҡ итеп йәшәп ҡалыу үҙебеҙҙән ҡулдарҙа; ҡояш, һыу һәм һауанан, туған тәбиғәтебеҙ хазиналарынан дауа, көс-ҡөҙрәт алайыҡ.

Йәй ҡәҙерен белгәндәргә бер ҙә үкенерлек булмағандыр быйыл шулай ҙа: биҙрә-биҙрә еләк, ҡосаҡ-ҡосаҡ үлән йыйып, ҡыҙынып-ҡойоноп ҡалды уңғандар. Эшкә бирелеп, миҙгел мәшәҡәттәре менән тәбиғәттә булып өлгөрмәгәндәр өсөн әле лә һуң түгел, әләйһәң: еләк бөтһә лә емеш бөтмәй, күңелебеҙҙе киң тотайыҡ. Алда әле беҙҙе башланырға торған тотош бер ай - муллыҡ һәм йомарт уңыш айы көтә: сейәһе, ҡарағаты-алмаһы, бешә ҡурай еләге... Был инде һинә көньяҡтан килгән турғай башылай ҙур, үҙе тәмһеҙ, үҙе ҡиммәт яһалма сейә түгел - әскелт- татлы ҡыр сейәһе, тәбиғәтебеҙ тәме татыған тау сейәһе - үҙебеҙҙеке!

Урағайҙың иң кәрәкле, иң изге һәм мөһим уңышы шулай ҙа - икмәк. Башҡортостан игенселәре июль аҙаҡтарында уҡ ураҡҡа төштө һәм арыш менән иртә культуралар уңышын йыя ла башланы, тик көнөн генә бирһен Хоҙай.

Күк кәнсәләре ни уйлайҙыр, ә бына Рәсәй Гидрометүҙәк хеҙмәткәре Людмила Паршина фаразлауынса, илдең Үҙәк һәм Көньяҡ, Себер округының көньяҡ-көнсығыш төбәктәрендә уртаса айлыҡ температура норманан юғарыраҡ күтәреләһә, Волга буйы һәм Уралдың көньяҡ тарафтарында август тотош алғанда былтырғынан һалҡынсараҡ, яуым-төшөмдөң мулыраҡ булыуы, тик шулай ҙа айҙың төүге ун көнлөгө ғәҙәттәгенән эҫерәк һәм ҡороҡ тороуы көтөлә. Тимәк, туған тәбиғәт ҡосағында ял итеп, тыуған еребеҙ ҡәҙерен тағы ла яҡыныраҡ тойоп, йылға-күлдәрендә һыу инеп, йәй менән хушлашырға әле бер ҙә һуң түгел, Төркиә дингеҙе ары торһон.

Ер ҡәҙере тигәндән, Башҡортостан биләмәләре "законлы" һәм законһыҙ рәүештә карьерҙар ҡаҙып, ер аҡтарып, файҙалы ҡаҙылма, алтын-көмөш эҙләүсе бизнес объектына әүерелде, уларҙың һулар һауабыҙ, эсәр һыуыбыҙҙы бысратып, тәбиғәтебеҙҙе ҡоротор емергес этлектәре хаҡында күп яҙылды һәм яҙыла, ләкин законһыҙлыҡ фактары дауам итә, ерҙәре-

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠӘНӘФИ НИ, НАҘЛЫ ҠЫҘ НИ...

**Ҡәнәфи - ул йомшаҡ, уңайлы ултырғыс ҡына түгел, биләгән вазифа ла, һинең булмышыңды үҙгәртеүсе төшөнсә лә икән...**

Эйе, ҡәнәфи уңайлы һәм йомшаҡ ултырғыс, заманса тел менән әйткәндә, комфортлы мебель. Ҡәнәфиҙе, йәғни креслоны хатта биләгән вазифаға ла тиңләйҙәр. Әйтәйек: "Ул министр креслоһында ултыра", "Креслоһын һаҡлап ҡалыу өсөн ул барыһын да эшләйәсәк", "Йылы һәм йомшаҡ креслоға ултырҙы", "Креслонан ҡолаҡ ҡаҡты" һ.б.

Бына мин үҙем, мәҫәлән, бер учреждениела ябай хеҙмәткәр булып эшләйем. Берҙән-бер көндө ойошмала эшләгән барыбыҙға ла һуңғы модалағы ҡәнәфиҙәр һатып алдыҡ. Быға тиклем бындай йомшаҡ һәм уңайлы ултырғыс тик директорыбыҙҙа ғына бар ине. Унда ултырһаң, эшләге килмәй, артҡа ҡаҡайып, ял итке килә, кемгәләр әмер биргә килеп тик тора икән. Тап шул мәлдә беҙҙең ойошмаға яңы хеҙмәткәр эшкә килде һәм әлеге лә баяғы креслола ҡайҡайып ултырған мин тегегә үҙемдең байтаҡ ғәмәли бурыстарымды атҡарыуҙы өйөп тә ҡуйҙым. Йәғни уға һалыштым. Бәхтиһәң, ҡәнәфиҙә ултырғанда һин уның йомшаҡ һөйәнгесенә генә түгел, башҡарған бурысыңда ла кемгәләр арҡаланаһың, таянаһың икән. Ул ғына ла түгел, ябай бүкәндән һәм ултырғыстан айырмалы рәүештә, кресло зыр әйләнә һәм һин үҙеңә табан йүнәлгән административ "уҡтарҙан" тайпылырға ла өлгөрәһең, имеш. Бына ни өсөн биләгән вазифаны "кресло"ға тиңләйҙәр икән дә...

Ошоларҙы иҫтә тотоп, бөтөнләй уҡ боҙолоп өлгөрмәҫ борон, креслоны ситкә ҡуйып, элекке өйрәнгән бүкәнемә ултырҙым. Ҡәнәфи кешене боҙа. Ҡәнәфи ни, матур, наҙлы ҡыҙ ни - барыбер бит ул! Ышанмаһағыҙ, ултырып ҡарағыҙ!

**Хөрмәт ИБРАҺИМОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Зәки Вәлиди урамында, Өфөгә ингән ерҙә ҡуйырға ниәтләгән бер нисә декоратив металл элемент варианты менән танышты. Хакимиәттең Төҙөләш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Паппе аңлатыуынса, элементтар баш ҡалаға ингән төп юлға зауыҡ һәм матурлыҡ өҫтәйәсәк. "Беҙ зәңгәр һәм күк төҫтәрҙе һайланыҡ, сөнки юл йылғаға яҡын һәм был төҫтәр һыуҙы символлаштырасаҡ. Өс вариант тәҡдим ителгәйне, һөҙөмтәлә ныҡлыҡ талаптарына тура килгәне һайланды, был уның ҡулла免ныу ваҡытын оҙайтасаҡ", - тип билдәләне Константин Паппе.

✓Башҡортостанда дәүләт колледждарының һәләтле студенттарына бүлышлыҡ итеү өсөн республика Башлығы стипендияһы күләме 2300 һумдан 4900-гә тиклем арттырылды. Стипендиялар һаны ла артҡан: 2021 йылда улар 107 булһа, 2022 йылда иһә 150. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин белдерҙе. "Улар 1 сентябрҙән түләнә башлай. Хәҙер 2022-2023 уҡыу йылында стипендияға дәғүә итеүселәрҙең асыҡ конкурсы уҙғарыла", - тине министр.

✓Андрей Назаров Асылыкүлдең һайығыуы мәсьәләһен шәхси контролгә алды. "Оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Фәрит улы миңә Асылыкүлдәге экологик хәлде шәхси контролгә алырға ҡушты, - тип яҙҙы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров социаль селтәрҙә. - Һуңғы йылдарҙа был проблема граждандарыбыҙҙы бик ныҡ борсой. Киләһе аҙнала Экология министрлығы вәкилдәре һәм башҡа яуаплы кешеләр менән күсмә кәңәшмә үткәрәбеҙ".

✓Өфөләге "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркын төҙөүселәр Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһындағы торлаҡ йорттарҙы һәм Петровское ауылындағы М. Шайморатов исемендәге 22-се мәктәпте төҙөкләндереү өсөн эш сәфәренә юлланды. Биналарҙы яңыртыуҙа 32 белгес ҡатнашасаҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уларҙы оҙатыу тантанаһында ҡатнашты һәм хәйерле юл теләне.

✓ *Милләттәшенең һалмыш йөрөүенә асыуы килгән апай: "Һинең кеүектәр милләтте бөлдөрә лә инде", - тип ҡысҡыра. Егет шунда уҡ айнып китә, ғәфү үтенә. Ә иң мөһиме, эшкә бынан һуң айыҡ килә башлай.*



беҙ ситтәргә һатыла, урмандар аяуһыҙ ҡырҡыла. Ситтәр талағаны етмәгән, әле килеп былай ҙа халыҡтың быуынына төшкән "Кроношпан" 45 мең башҡорт урманын ҡырҡыуға республика етәкселегенән рөхсәт һорай икән. Был ниндәй хаяһыҙлыҡ! Башҡорттоң бөтөн тарихы уның аҫаба ерҙәрен талау, тартып алыу һәм ҡыҫырыҡлауға ҡаршы аяуһыҙ көрәш менән бәйле булыуын иҫбатлау кәрәкмәй, крепостнойлыҡ системаһын юҡҡа сығарғандан һуң ерҙәрҙе талау айырыуса көсәйә һәм был урындағы төп халыҡҡа ҡарата батша власының төп сәйәсәтенә әүерелә. Был хаҡта шул замандарҙан ҡалған документтар ҙа асыҡ һөйләй. Бына, мәҫәлән, 1866 йылда Ырымбур губернаторы Крыжановскийҙың батшаға яҙған отчетынан өҙөк: "...Хакимиәттең төп хәстәрлеге ... башҡорт ерҙәрен тартып алыу. Был маҡсатҡа өлгәшеүҙең берҙән-бер юлы ерҙәрҙе межалау". Һәм күп тә үтмәй, батша башҡорт ерҙәрен яңынан межалау хаҡындағы законға ҡул ҡуя, һөҙөмтәлә башҡорт ерҙәренең иң һәйбәт биләмәләре килмешәктәр өсөн "запас фондҡа" тартып алына. 1890 йылдар ахырына ғына ла башҡорттарҙың 839 553 дисәтинә ере ошо "фондҡа " күсерелә. Башҡорт ерҙәренә ҡанығыу төрлө хәйләкәр юлдар менән бойомға ашырыла, тора-бара хатта аҫаба башҡорттарҙың "йән башына тәғәйен" булмаған йәйге йәйләү биләмәләренә лә Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан ҡомһоҙ ҡулдар һуҙыла һәм арзанға ғына һатып алына башлай. Был хаҡта 1876 йылда "Ырымбур листогы" гәзите: "Башҡорт ерҙәре менән Калифорниялағы алтын биҙгәгенә оҡшаш хәл килеп тыуҙы", - тип яҙа.

**Әйткәндәй, төп халыҡты ҡыҫырыҡлау, һыйҙырмау, быуаттар буйы тейәк иткән ерҙәренән ҡыуыу, хатта тыуған телдәрендә һөйләшеүҙе тыйыу Ер йөҙөндәге төп халыҡтарҙың уртаҡ ҡыҙғаныс яҙмышы ул. Уларҙың күпселеге дәүләт машинаһы тарафынан бындай эҙәрлекләүҙәргә ҡаршы тора алмай, ҡаҡшауға, юғалыуға дусар ителде. Билдәле этнограф Раил Кузеев яҙғанса, Волганан Тоболға тиклем йәйрәп йәшәгән башҡортто ла баш эйҙерергә маташыу ике быуат ярымға һуҙыла. Башҡорт ихтилалдарын Төньяҡ Америка индеецтары көрәше менән сағыштырыу урынлы булыр ине, ти ғалим. Бөгөн океан аръяғындағы ирек һөйәр ҡаһарман рухташтарыбыҙ юғала барыусы аҙ һанлы төп халыҡтар иҫәбендә. Бәхеткә, тамырҙарында көслө гендарының ҡаны типкән башҡорт милләте бөгөн аҙ һанлы уҡ булмаһа ла, уның ҡарауы, үҙ исеме менән аталған дәүләтселек биләмәһендә төп халыҡ хоҡуғында ҡала.**

Шулай булғас, был статусҡа хас хоҡуҡтар унымың мәнфәғәтен дә ҡуҙәтергә тейештер, тип аңлашыла. Мәғлүм булыуынса, Төп халыҡтарҙың хоҡуғы тураһында Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы декларацияһында теге йәки был дәүләттең төп халыҡтарҙы йәшәгән ерҙәренән, биләмәләренән һәм ресурстарынан мәхрүм итеү ихтималлығын булдырмау һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау тейешлеге иғлан ителә. Башҡортостан еренә, унын урмандары, башҡа төр тәбиғи байлыҡтарына ҡыҙыҡыусы ҡомһоҙҙар, закондыҙ рәүештә ҡул һуҙыусылар үткән быуаттарҙа тороп ҡалмаған бит, югиһә. Ер йөҙөндәге төп халыҡтарҙың халыҡ-ара көнө **(9)** айҡанлы әйтеп кителергә тейешле бер кәлимә булды был.

Урағай календарына ентеклерәк күҙ һалайыҡ, булмаһа: РФ Ҡораллы көстәренең Тыл һәм 1914-1918 йылдарҙағы Беренсе донъя һуғышында һәләк булған Рәсәй яугирҙарын иҫкә алыу, шулай уҡ Инкассатор **(1)** көндәре, Һауа-десант ғәскәрҙәре **(2)**, Хиросима көнө - Ядро ҡоралын тыйыу өсөн Бөтөн донъя ғәмәлдәр , "Донъя табиптары тыныслыҡ өсөн" халыҡ-ара көндәр **(6)**, Тимер юлсылар **(7)**, Халыҡ-ара альпинизм, Ғәшүрә көнө **(8)**, Ер йөҙөндәге төп халыҡтарҙың халыҡ-ара көнө **(9)**, Хәрби-һауа көстәре, Халыҡ-ара йәштәр **(12)**, Физкультурниктар, Бөтөн донъя һулаҡайҙар **(13)**, Башҡортостан умартасылары һәм Төҙөүселәр **(14)**, Археолог **(15)**, Бөтөн донъя гуманитар ярҙам, Бөтөн донъя фотография **(19)** көндәре, Бөтөн донъя берәҙәк хайуандар **(20)**, Рәсәй Һауа флоты **(2)**, РФ Дәүләт флагы **(22)**, Совет ғәскәренең Курск һуғышында фашистарҙы тар-мар иткән көн **(1943 йыл, 23)**, Өфөлә 2-се Бөтөн башҡорт ҡоролтайы асылыуға - 105 йыл **(1917, 25)**, Рәсәй киноһы **(27)**, Шахтер **(28)**, Ядро һынауҙарына ҡаршы көрәш **(29)**, Ветеринарҙар **(31)** көндәре.

**Урағайҙа тыуғандар:**

**16 -** тарихсы-ғалим, Салауат Юлаевтың тормош юлы һәм эшмәкәрлеген өйрәнеүсе, тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Инга Гвоздиковаға - 85 йәш** (1937).

**18 -** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Рәмзиә Хисамоваға - 75 йәш** (1947).

**23 -** рәссам, график, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, республиканың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Рафаэль Ҡадировҡа - 65 йәш** (1957).

**27 -** шашка буйынса халыҡ-ара гроссмейстер, донъя, Европа беренселектәре еңеүсеһе һәм призеры **Айнур Шәйбәковҡа - 30 йәш** (1992).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# АЙЫҒАБЫҘМЫ?

**Уҙған быуаттың 80-се йылдарында йәшәгәндәр илебеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙың эскелеккә ҡаршы көрәш менән башланып китеүен хәтерләйҙәр. Был исулды һуңынан күптәр ил етәкселегенең ҙур хатаһы, тип иҫбатлап маташты...**




Ошонда мин партияның Беренсе секретары Никита Хрущевтың Ҡушма Штаттарға барып ҡайтҡас, Төньяҡ Америкала кукуруздың нисек шәп үҫеүен, ниндәй файҙа килтереүен маҡтауы, ә етәксе тирәһендәгеләрҙең уны тиҙ генә Мурманск тарафтарында сәстерергә ашығыуын иҫкә төшөрҙөм. Йылы климатта ғына үҫергә тәғәйенләнгән культура сәскә атырға ла өлгөрмәне, ҡар яуҙы һәм йыйылмай ҡалды. Был бер кемде лә борсоманы ла тиерлек, сөнки был Беренсенең идеяһы ине бит.

Һуңғыһында ла ошо хәл ҡабатланды, эскелеккә ҡаршы көрәш иғлан ителеү менән йөҙәм ҡыуаҡтары ҡырҡылып бөттө, спирт-араҡы заводтары ябылды, алкоголһеҙ туйҙар, мәжлестәр модаға инде. Ләкин "өстән" баҫым тамамланыу менән хәл кирегә ҡайтты. Тик йөҙөм ҡыуаҡтары ғына юҡ ине инде...

Илебеҙҙә дин азатлығы ҡайтанан иғлан ителгәс, мосолман руханиҙары ла Ислам диненә агитацияны нәҡ айыҡ тормош алып барыуҙан башланы. Был дөрөҫ тә, сөнки мең йылдан ашыу тарихы булған динебеҙ был өлкәлә бер ваҡытта ла яңылышмаған һәм иң мөһиме, бер генә мосолман да быны инҡар итмәгән. Ә имамдар көндәлек тормошта үҙ өлгөһөндә айыҡ тормош алып барыуҙың өҫтөнлөгән иҫбатлай килә.

Ошо урында бер фактҡа туҡталып үтергә теләйем. Ислам дине ғәрәп Мөхәммәт Мостафа (с.ғ.с) аша таратылған. Алкоголле эсемлекте лә ғәрәптәр уйлап тапҡан. Тәмләп ҡарағас, "Әл - ҡәһел!" тип маҡтағандар, беҙҙеңсә, "Бик гүзәл!" тигәнде аңлата инде. Дингә килгәндәрҙең аҙсылыҡта икәнен иҫәпләнән, йәмғиәтебеҙҙең айыҡ тормошҡа күсеүҙән әлегә бик йыраҡта торғанын аңлайһың. Тарих та шуны күрһәтә: тыйыуҙар менән генә был насар күренештән ҡотолоп булмаясаҡ.

Шулай ҙа күптәр хәҙер был хәл менән ризалашмауына шаһитбыҙ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан ойошторолған "Айыҡ ауыл" конкурсын ҙур иғтибар менән ҡарап барам, сөнки эскелек халҡыбыҙға ниндәй бәлә килтереүен ҡуҙаллауы ла ҡурҡыныс. Шундай статистик мәғлүмәт хәтерҙә ҡалған: эскесегә әйләнгән ир-егеттең 6 проценты ғына дауалана икән, ә ҡатын-ҡыҙҙың береһе лә был алама ғәҙәттән ҡотола алмай.

Мәләүездә бынан утыҙ йылдан ашыу элек ойошторолған "Көнгәк" берекмәһе үткәргән кисәлә беҙгә бер мәғлүмәт бирелде. Тәбиғәт мосолман халыҡтарына алкоголгә ҡаршы тороу һәләте бирмәгән. Ул саҡта берекмәнең тотош бер ултырышын ошо эскелеккә ҡаршы көрәш темаһына бағышлағайныҡ. Кемдәр сығыш яһағандыр ҙа, ниндәй дәлил килтергәндәрҙер, хәтерләмәйем. Шулай ҙа бер сығыш хәтерҙә уйылып ҡалған. Беҙҙән өлкәнерәк йәштәге таныш булмаған апай һүҙ алды. Ҡаланың ағас эшкәртеү комбинатындамы, урман комбинатындамы эшләй икән. Кис автобус менән сменаға китеп барам, ти. Туҡталышта иҫерек бер башҡорт ире бәүелә-һығыла баҫып тора, ти. Апайҙың артындағы ултырғыста ултырған ике мәрйә һөйләшә, имеш: "Ярар, беҙҙең халыҡ мең йыл эсә, организмы өйрәнеп бөткән, ә бына башҡорттар бер нисә йыл эсендә алкоголикка әйләнәсәк бит". Мәрйәләр дөрөҫ һөйләй бит, тигән фекергә килгән апай эшкә килһә, теге башҡорт уҙаманы - смена етәксеһе - теле көрмәлеп: "Нимә апа-пай, к-килеп еттеңме?"- тип һорай икән.

Милләттәшенең һалмыш йөрөүенә асыуы килгән апай тегенең яғаһынан бөрөп һелкә лә: "Һинең кеүектәр милләтте бөлдөрә лә инде", - тип ҡысҡыра. Егет шунда уҡ айнып китә, ғәфү үтенә. Ә иң мөһиме, эшкә бынан һуң айыҡ килә башлай. Ундай апайҙар бөгөн дә бик кәрәк тә бит...

Ҡоролтай уҙғарған конкурсҡа әйләнеп ҡайтайыҡ. Һеҙгә нисектер, миндә шундай фекер тыуҙы: әллә Башҡортостанда гел башҡорт ауылдарында ғына ҡулланаларамы ул "шайтан һыуын"? Конкурсҡа башлыҫа улар ғына ҡатнаша түгелме? Улайһа, конкурстың исемен "Айыҡ башҡорт ауылы" тип үҙгәртергә кәрәктер?

Күптән түгел Көйөргәҙе районы Яҡут ауылы халҡы ауылда спиртлы эсемлектәр һатмау тураһында ҡарар ҡабул итеп, уны район Советы сессияһы раҫлап, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай был турала закон ҡабул итте. Был бик шәп, әлбиттә. Әммә һәр ауыл буйынса ундай закон сығарыу кәрәкме? Бәлки, "Айыҡ башҡорт ауылы" конкурсында ҡатнашыу шарттарының беренсе пункты ошо булырға тейештер. Ауыл бер йылға, йә мәңгелеккә алкоголһеҙ йәшәргә, тип үҙе хәл итергә тейеш түгелме ни?

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хеҙмәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2 августа Стәрлебаш районында капиталь ремонттан һуң һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәрҙе реабилитациялау филиалы асыла. 2021 йылда Башҡортостан Башлығы Үҙәк район дауаханаһы территорияһында урынлашҡан бинаны ремонтлауға республика бюджетынан аҡса бүлгәйне. Быйыл яңы реабилитацион ҡорамалдар һәм мебель һатып алынған.

✓"Баҫыу көнө" төбәк семинары быйыл башлап Ейәнсура районында үтте. "А7 Агро РБ" ауыл хужалығы предприятиеһы яланында Урал аръяғының 12 районы аграрийҙары төбәктә 2022 йылға ураҡ үҙенсәлектәре буйынса фекер алышты. "Баҫыу көнө" киләһе айҙа Благовар һәм Янауыл районында үтәсәк. Бында республикала уңыш йыйыуға символик старт бирҙеләр. Мәләүез районында - ужым арышы, Көйөргәҙелә ужым бойҙайы саба башланылар. Йәрмәкәй, Туймазы, Көйөргәҙе, Өфө райондарында иң иртә культураны - ужым шипкәнен һуғыуға тотонғандар.

✓Быйыл республика ауыл хужалығы эшсәндәре 1 млн 757 мең гектар бөртөклө ашлыҡ һәм ҡуҙаҡлы иген культураларын урып алырға тейеш. Шуларҙың 262 мең гектары - ужым ашлығы һәм 1 млн 495 мең гектар яҙ сәселгән, ҡуҙаҡлы иген культуралары. Бынан тыш, республикала 435,63 мең га май бирә торған үҫемлектәр, 44,32 мең га шәкәр сөгөлдөрө, 3,9 мең га картуф һәм йәшелсә өлгөрөп килә.

✓Башҡортостан буйынса Россельхознадзор идаралығы бал ҡорттарын варроатоздан дауалау һәм иҫкәртеү өсөн составында флувалинат булған Ҡытайҙа сығарылған дарыуҙың (FLUVAROL) законһыҙ әйләнештә булыуын асыҡланған. Был дарыу Рәсәйҙә һәм Таможня союзы илдәрендә тейешле теркәлеү үтмәгән. Бынан тыш, ветеринарияла ҡулланылған "Зинаприм" (Испания) дарыуы өлгөһө лә сифатына тап килмәүе асыҡланған. "Ҡытайҙа сығарылған һәм теркәлеү үтмәгән ветеринария дарыуҙары тураһында тиҙ арала хәбәр итеүегеҙ һорала", - тип белдерҙеләр идаралыҡтан.

✓Августың тәүге көнөнән илдең 7,3 миллион пенсионерына айлыҡ түләү арта. Ул иҫәпкә эшләүсе пенсионерҙар, шулай уҡ 80 йәште үтеүселәр, хәрби пенсионерҙар, беренсе төркөм инвалидтар инә. Был яңылыҡ социаль һәм дәүләт пенсияһы алыусыларға ҡағылмай әлегә.

✓ *Баймаҡ районында республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһының рәсми билдәләнгән сиктәрендә файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу, быраулау-шартлатыу һәм тау эштәре, мал көтөү һәм дарыу үләндәрен йыйыу, усаҡ яғыу тыйыла.*



ҠЫҪҠАСА

# ТАЛҠАҪ ҺАҠЛАНА

**Росреестр һәм Кадастр палатаһы белгестәре "Талҡаҫ күле" махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһенең сиктәре тураһында мәғлүмәттәрҙе Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрына индерҙе.** Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Башҡортостан Башлығының 2022 йылдың 18 апрелендәге 211-се указына ярашлы, Баймаҡ районында республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһының рәсми билдәләнгән сиктәрендә файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу, быраулау-шартлатыу һәм тау эштәре, мал көтөү һәм дарыу үләндәрен йыйыу, "рөхсәтһеҙ" туҡтау һәм транспорт хәрәкәте, усаҡ яғыу, һунар итеү, ҡалдыҡтарҙы күмеү тыйыла. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 215 һаҡланған тәбиғәт объектының 212-һенең сиге Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрына индерелгән (98,6 процент). Йыл аҙағына тиклем Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, Өфөләге Ботаника баҡса-институты, "Ҡыҙыл шишмә" тәбиғәт ҡомартҡыһы сиктәре реестрына индереү күҙаллана. Тәбиғәт объекттары тураһында мәғлүмәтте Росреестрҙың кадастр картаһында күрергә мөмкин.

✓ **Өфө ҡала хакимиәте "Хеҙмәт фиҙаҡәрлеге ҡалаһы" стелаһын ҡуйыу буйынса эштәрҙе башҡарыу өсөн подрядсы ойошманы асыҡлауға электрон асыҡ конкурс иғлан итте.** Контракт төҙөү быйыл август һуңына планлаштырыла. Еңеүсе контрактта ҡаралған шарттарҙы 30 ноябргә башҡарырға тейеш. Өфө ҡалаһы халҡының тауыш биреүе һөҙөмтәһендә стела Ағиҙелдең төҙөкләндерелгән яр буйында, ҡалаға ингәндә автомобиль күперҙәренән уң яҡта ҡалған майҙансыҡта урын аласаҡ. Әйткәндәй, "Хеҙмәт фиҙаҡәрлеге ҡалаһы" маҡтаулы исеме халҡы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Еңеүгә ҙур өлөш индергән, фронтты хәрби һәм башҡа продукция менән тәьмин иткән ҡалаларға бирелә. 2020 йылдың 2 июлендә Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Указы менән 20 ҡала, шул иҫәптән Өфө лә был исемгә лайыҡ булды.

✓ **Башҡортостанда күпселек социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә хаҡтар төшкән, тип хәбәр итте республика статистары.** Башстаттың аҙналыҡ күҙәтеүҙәре һөҙөмтәләренә ярашлы, республикала яңы кәбеҫтәнең хаҡы 14,7 процентҡа төшкән. Уның килограмын хәҙер 28 һумға һатып алырға мөмкин. Картуфтың хаҡы 8,4 процентҡа кәмеп, килограмы 48 һум, ә 7,1 процентҡа осһоҙланған кишерҙең уртаса хаҡы 52 һум тәшкил иткән. Шулай уҡ помидор, алма, һыйыр ите, дөгө, ҡара сәй, икмәк, маргарин, бешкән колбаса, балалар өсөн емеш-еләктән консервалар, сырҙар, аҡ май, йомортҡа, көнбағыш майы, шәкәр, туңдырылған балыҡ, ҡарабойҙай, банан, вермишель, шоколад кәнфит, сөгөлдөр һәм макаронға хаҡтар 0,05-3,4 процентҡа кәмегән. Ә бына сосиски һәм сарделькалар хаҡы 3 процентҡа артып, килограмы 416 һумға тиклем ҡиммәтләнгән. Ҡыяр 82 һумға, һуған 45 һумға тиклем ҡиммәтләнгән. Шулай уҡ хаҡтары күтәрелгән аҙыҡ-түлек исемлегенә тары ярмаһы, һөт, ярым ыҫланған һәм бешереп ыҫланған колбаса, печенье, балалар өсөн киптерелгән һөт ҡатышмалары, эремсек, он, ҡаймаҡ, балалар өсөн йәшелсә һәм ит консервалары, тоҙ, сусҡа һәм һарыҡ ите ингән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӨРӘШ ҺӨҘӨМТӘ БИРӘ



**Республика Башлығы Радий Хәбиров легаль булмаған алкоголь продукцияһына ҡаршы көрәш һөҙөмтәләре хаҡында һөйләне.**

"Бының менән дүртенсе йыл көрәшәбеҙ. Һөҙөмтәһе бар. Әгәр 2018 йылда алкоголдән 211 кеше үлһә, 2021 йылда - 57 кеше, йәғни 4 тапҡырға аҙыраҡ. Күпме бала тулы ғаиләлә үҫеү, айыҡ атайҙары менән ваҡыт үткәреү, улар менән футбол уйнау, бергәләп дәрес әҙерләү мөмкинлегенә эйә булды", - тип яҙҙы төбәк етәксеһе үҙенең Телеграм-каналында.

Радий Хәбиров легаль булмаған алкоголгә ҡаршы көрәште һәм алкоголде һатыуҙы яйға һалыу мәсьәләһенең еңел түгеллеген билдәләй. "Алкоголь һатыуҙы ҡаты тотҡан өсөн йыш ҡына тәнҡитләйҙәр, бер яҡтан - эшҡыуарҙар, икенсе яҡтан - ҡайһы бер кешеләр. Мәҫәлән, һабантуйҙа, Йәштәр көнөндә һатыуҙы тыйҙыҡ, Яңы йыл байрамдарында махсус режим индерҙек. Әммә Аллаһ белә - беҙ барыһын да кеше өсөн эшләйбеҙ, - ти ул. - Сифатһыҙ алкоголь эсеп, күпме кеше ҡырылыуына үҙебеҙ шаһит булдыҡ. Ә беҙҙең ауылдарҙа ҡайһы бер кешеләр оят белмәй, үҙҙәренең күршеләренә суррогат һатты".

Ошо маҡсаттан сығып, республикала "Айыҡ ауыл" проекты эшләй башланы. Унда республиканың бөтә райондары, хатта бәләкәй генә тораҡ пункттар ҙа ҡатнашты. Конкурс үткәрелгән өс йыл эсендә муниципаль этапта 150 ауыл, республиканыҡында 27 ауыл еңеүсе булды. "Республикала бик күптәрҙең айыҡ тормош һайлауы ҡыуандыра, улар спорт менән шөғөлләнә, фестивалдәр, ярыштар үткәрә, онотолған кәсептәрҙе тергеҙә, балалар, йәштәр тәрбиәләү менән була, байрамдар ойоштора. Өҫтәүенә, ҡайһы бер ауылдар халҡы үҙҙәренең тораҡ пунктында тулыһынса алкоголь һатыуҙы тыйыу тураһында мөрәжәғәт итә башланы", - ти Башҡортостан Башлығы.

# БЕРЛӘШТЕРГӘНДӘН ҺУҢ...



**Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Өфө фән һәм технологиялар университеты: яңы ҡарарҙар һәм ҙур мөмкинлектәр" тип аталған брифинг ойошторолдо. Ул Башҡортостандың ике ҙур юғары уҡыу йорто булған Башҡорт дәүләт университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университетын берләштереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән яңы вуздың эшмәкәрлеген ойоштороу мәсьәләләренә арналды.**

Бер сәғәттән ашыу барған тура бәйләнештә бихисап һорауҙар яңғыраны. "Ике университетты ҡушыу яҡлыларҙың иң төп дәлилдәренең береһе - был бөгөнгө глобаль көнәркәшлек шарттарында юғалып ҡалмау өсөн мөһим һәм кәрәкле аҙым. Был дәлил ни дәрәжәлә нигеҙле?" - тигән һорауға Башҡорт дәүләт университеты ректоры вазифаһын башҡарыусы Вадим Захаров: "Бөгөн Рәсәйҙә лә, донъяла ла аҡыл, талант өсөн көнәркәшлек бара, беҙ барыбыҙ ҙа ошо шарттарҙа эшләйбеҙ. Шул көрәш барышында юғалып ҡалмау өсөн айырым өҫтөнлөктәргә эйә булыу шарт. Әлеге ваҡытта был йәһәттән ҙур мөмкинлектәр асылып тора. Яңы вуз студенттар һаны буйынса илдәге иң ҙур биш юғары уҡыу йортоноң береһе буласаҡ. Өфө фән һәм технологиялар университеты республика кимәлендәге ҙур проекттарҙы тормошҡа ашырыуға ла булышлыҡ итәсәк. Бында һүҙ донъя кимәлендәге Евразия фәнни белем биреү үҙәге, Вуз-ара студент кампусы, Фән һәм мәҙәниәт йорто төҙөлөшө һәм башҡалар тураһында бара", - тип яуап бирҙе. Уға шулай уҡ: "Әлеге ваҡытта ҡабул итеү кампанияһының иң ҡыҙған мәле. Абитуриенттар өсөн ниндәй үҙгәрештәр көтөлә?" - тигән барыһын да ҡыҙыҡһындырған һорау ҙа бирелде. "Быйылғы ҡабул итеү кампанияһы ике вуз өсөн дә үҙенсәлекле, йәғни яңы университет барлыҡҡа килеү шарттарында бара. Бөгөнгө абитуриенттар Башҡорт дәүләт университетына йәки Өфө дәүләт авиация техник университетына уҡырға инәсәк һәм Өфө фән һәм технологиялар университетында уҡыясаҡ. Бөгөнгө студенттар ниндәй шарттарҙа уҡырға ингән, улар өсөн шулар һаҡланасаҡ. Ә дипломда "Башҡорт дәүләт университетына йәки Өфө дәүләт авиация техник университетына уҡырға инде", "Өфө фән һәм технологиялар университетын тамамланы" тигән яҙыу буласаҡ", - тигән яуап алынды.

# АЛДАШҠАН ӨСӨН - ШТРАФ!



**Башҡортостанда сүп-сар түгеү тураһында ялған мәғлүмәт өсөн штрафтар билдәләнгән закон көсөнә инде.**

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев белдереүенсә, штраф санкциялары көнкүреш сүп-сары йыйыу менән шөғөлләнеп, "ТКО-Башҡортостан" мәғлүмәт системаһына мәғлүмәт һалмаған йәки тулы, дөрөҫ мәғлүмәт ебәрмәгән вазифалы шәхестәргә, предприятие-ойошмаларға ҡарата ҡулланыла. Тәүҙә иҫкәртеү бирелһә, һуңынан вазифалы кешеләргә 500 һумдан мең һумға тиклем, предприятие-ойошмаларға 5 мең һумдан 10 мең һумға тиклем штраф һалына. Ҡабаттан хоҡуҡ боҙолғанда был сумма 3-5 мең һум һәм 15-30 мең һумға тиклем арта.

"ТКО-Башҡортостан" ГИС-ына контейнер майҙансыҡтарынан барлыҡ мәғлүмәт йыйыла һәм уның нигеҙендә тотош системаның эш сифаты тураһында һығымта яһала. К. Толкачев белдереүенсә, мәғлүмәт системаһына бик йыш ялған хәбәрҙәр килә. Төбәктәге барлыҡ контейнер майҙансыҡтары цифрлаштырылған һәм интерактив картаға индерелгән. Сүп-сар ташыусылар йөктө сығарырҙан алда һәм һуңынан фотоға төшөрөп һалырға тейеш. Һөҙөмтәлә координаторҙар водителдәрҙең бер үк фотоны бер нисә контейнер майҙансығынан ебәреүен асыҡлаған. Бөгөнгә республикала бындай майҙансыҡтар бик күп һәм мәғлүмәт системаһы тулы картинаны күрергә ярҙам итә, бының өсөн уның дөрөҫ мәғлүмәт менән тулыуы шарт. Шуға ла штрафтар тәртип булдырыу маҡсатында индерелә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Нуғай ауылының Баллы, Ҡулаев, Рощинская урамдары менән сикләнгән 6,9 гектар майҙанда урынлашҡан кварталын төҙөкләндереү проектына ярашлы, ҡасабала яңы поликлиника, тиҙ ярҙам станцияһы, бассейны булған физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөү күҙаллана. Әлеге ваҡытта проектлау территорияһында "Пятерочка" магазины һәм ресурс бүлеү подстанцияһы ғына бар, ҡалған майҙан буш.

✓ Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы билдәләүенсә, Пушкин урамынан Киров урамына тиклем арауыҡтағы Ленин урамын быйыл ремонтлай башлап, киләһе йылда тамамлау планлаштырыла. Дорофеев урамынан Аксаков урамына тиклем арауыҡта Коммунистик урамындағы төҙөлөш-монтаж эштәре 2023 йылда башланасаҡ һәм 2024 йылда тамамланасаҡ. Ратмир Мәүлиев шулай уҡ тротуарҙар темаһын да ҡуҙғата. Мөмкин тиклем күберәк йәйәүлеләр зоналарын тәртипкә килтерергә кәрәк, ти ул.

✓ Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев алдағы йылдарҙа баш ҡаланың үҙәк тарихи өлөшөндә Коммунистик, Пушкин һәм Ленин урамдары яңыртыласағы тураһында белдерҙе. "Пушкин урамы буйлап Цюрупа урамынан алып Ленин урамына тиклем ара асфальтланды. Әлеге ваҡытта Ленин урамынан К. Маркс урамына тиклем участкала эш алып барыла. Гранит тротуар һалыу менән бер рәттән, "Таҙа күк" программаһын тормошҡа ашырып, сымдарҙы ер аҫтынан үткәрәбеҙ. Барлығы 4,4 километр кабель алмаштырыласаҡ, 48 бағана ҡуйылған", - тип яҙа ул үҙенең Телеграм-каналында.

✓ БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, баш ҡалала һуғыш ветерандарының клиник госпитален төҙөү өсөн майҙансыҡ һайлана, сөнки быға тиклем Затонда тәҡдим ителгән биләмә, карст бушлыҡтары һөҙөмтәһендә, төҙөлөш өсөн яраҡһыҙ тип табылған. Госпиталь Өфө ҡалаһының 450 йыллығын байрам итеү сиктәрендә төҙөләсәк объекттар исемлегенә инә һәм дөйөм майҙаны 45 мең квадрат метр тәшкил итеп, 550 урынға планлаштырыла, сменаһына 300 кешене ҡабул итәсәк.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ *Кемдер бындай ғәмәлдәр өсөн сыҡҡан сығымдарҙы иҫәплә(р)гә лә онотмай, сөнки ҡойма ҡуйыу, уларҙы ҡабат алыу - хеҙмәт талап иткән эш һәм бушлай башҡарылмайҙыр бит.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЮЛ ҠОЙМАЛАРЫ...

## ҡыуаҡтар менән алмаштырыла



**Яҙҙан алып Өфө халҡын бигерәк тә ҡаланың үҙәгендә: Ленин, Цюрупа, Маяковский урамдарында юл менән тротуарҙы айырып ҡуйылған ҡоймаларҙың, шул иҫәптән суйындан ҡойолғандарының да, урындарынан юғала башлауы аптырата. Тротуарҙар "яланғасланып", йәйәүлеләр хәүеф зонаһында ҡалды, тип иҫәпләй улар. "Башинформ" агентлығы ҡала мэрияһынан, БР Транспорт министрлығынан һәм баш ҡаланың Дәүләт автоинспекцияһынан ҡоймалар менән нимә булыуы тураһында белеште.**

- Журналистар менән үткәрелгән матбуғат конференцияһында ҡала башлығы Ратмир Мәүлиев ҡала юлдарындағы ҡоймаларҙы алыу тураһында шәхсән хәбәр иткәйне инде: "Бөгөн Өфөләге 52 километр оҙонлоҡтағы юл ситтәренә ҡойма ҡуйылған. Яңы СНиПтар индерелеүгә бәйле, уларҙың бер өлөшөн алыу мөмкинлеге бар. Беҙ был эшкә тотондоҡ та инде, 2 километрҙан уларҙы алдыҡ. Был 4-5 процент тирәһе. Ҡоймалар алынған урындарға ҡыуаҡтар ултыртасаҡбыҙ. Уларҙы көҙөн ултыртырбыҙ һәм ереккәндәрен көтөп, эште артабан дауам итербеҙ, - тине ул. - Мин ҡоймалар бөтөнләй кәрәкмәгән урындар тураһында әйтәм. Мәҫәлән, белем биреү объекттары булған, балалар уҡыған урындарҙа хәүефһеҙлек менән бәйле улар кәрәк".

- Өфө халҡы социаль селтәрҙәрҙә ҡойма темаһын урап үтмәне. Берәүҙәр уларһыҙ яҡшыраҡ булыр, урамдар "тын алып ҡалыр", аҙаҡ инде бөтөнләй "йәшелләнер" тиһә, икенселәр хәүефһеҙлек өсөн борсола, ҡоймалар йәйәүлеләрҙе юл-транспорт һәләкәтенән һаҡлай, машиналарҙы "туҡтата", ти. Күптәрҙе ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың эҙмә-эҙлекле булмауы асыуландыра. Кемдер бындай ғәмәлдәр өсөн сыҡҡан сығымдарҙы иҫәпләргә лә онотмай, сөнки ҡойма ҡуйыу, уларҙы ҡабат алыу - хеҙмәт талап иткән эш һәм бушлай башҡарылмайҙыр бит. Шулай уҡ суйын һәм тимер конструкцияларҙың артабанғы яҙмышы ла билдәһеҙ.

"Эш күп булыр, ҡыуаҡтарҙы һәр ваҡыт алмаштырып торасаҡтар. Ә был ҙур аҡса... Ҡышын уларҙы трактор менән ҡаҙып, соҡоп бөтәсәктәр. Хатта ағастарҙы ла һындыралар бит, - ти бер ҡатын-ҡыҙ. - Ғөмүмән, тәүҙә ҡыуаҡтар ултыртып, улар үҫеп киткәс кенә ҡоймаларҙы һүтергә кем ҡамасауланы икән?"

"Башта йәшеллекте соҡоп алырға аҡса туҙҙыралар, һуңынан - ҡаланы йәшелләндерергә. Башта күрмәлекһеҙ ҡоймаларға аҡса түктеләр, хәҙер уларҙы һүтеүгә. Логика ҡайҙа?" - ти бер Өфө кешеһе.

"Ниңә ҡоймаларҙы алырға? Башҡа эшегеҙ юҡмы? Ҡайһы бер кешеләр бит даими рәүештә юлды ярамаған урындан аша сыға, ә был аварияға тура юл", - тип белдерә икенсеһе.

***- Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығында баш ҡалалағы ҡоймалар буйынса мәсьәләнең мэрия ҡарамағында булыуын аңлаттылар.*** "Баш ҡалалағы автомобиль юлдары урындағы әһәмиәткә эйә автоюлдар булып һанала. Ҡанунға ярашлы, уларҙа ниндәйҙер эш алып барыу урындағы үҙидара органдары ҡарамағында. Бынан тыш, Милли стандарттарға ярашлы, ҡоймалар йәйәүлеләрҙең хәрәкәтен тәртипкә килтереү һәм уларҙың рөхсәт ителмәгән урында юлды аша сығыуына юл ҡуймау өсөн тәғәйенләнгән", - тип комментарий бирҙеләр министрлыҡта. Йәғни ҡоймаларҙың төп функцияһы - йәйәүлеләрҙе юл-транспорт ваҡиғаһынан һаҡлап ҡалыу ғына түгел, ә уларҙың рөхсәт ителмәгән урында юлға сығыуына кәртә ҡуйыу.

***- Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә ҡоймаларҙың ҡайҙа ҡуйылыуын, ҡайҙан алыныуын, уларҙы ҡайҙа алып китеүҙәрен һәм быларҙың барыһы ла нимә өсөн эшләнгәнен аңлаттылар.***

Шулай итеп, ГОСТ-ҡа ярашлы, йәйәүлеләр өсөн ҡуйылған ҡоймалар йәйәүлеләр өсөн барлыҡ ер өҫтө көйләнгән үткәүелдәрендә; балалар учреждениелары эргәһенән үткән юл йәки урамдар участкаларындағы көйләнмәгән үткәүелдәрҙә; йәйәүлеләр тапалыуға бәйле юл-хәрәкәт һәләкәттәре күп булған урындарҙа ҡулланыла. Улар барыһы ла ЮХХДИ күрһәтмәһе буйынса ҡуйыла. Шул уҡ ваҡытта 2020 йыл һуңында ГОСТ-ҡа үҙгәрештәр индерелә һәм уға ярашлы, автоюл йәйәүлеләр тротуарынан бер метрҙан ашыу киңлектәге газон менән айырылып торһа, ул урында ҡоймалар кәрәкмәй, әммә был урында тотош ҡыуаҡ булырға тейеш. "Ҡала хеҙмәттәре ЮХХДИ инспекторҙары менән берлектә барлыҡ йәйәүлеләр өсөн ҡоймалар ҡуйылған урындарҙы йөрөп, уларҙы һүтеү мөмкинлеген ҡарап сыҡты. Тикшереү һөҙөмтәһендә 1944 метр (972 секция) ҡойманы һүтергә мөмкин икәнлеге асыҡланды. Әле 415 секция һүтелгән. Улар райондарҙы төҙөкләндереү буйынса хеҙмәттәрҙә һаҡлана һәм сафтан сыҡҡандарын алмаштырыу, шулай уҡ балалар учреждениелары эргәһендә, авариялар йыш булған урындарҙа ҡуйыласаҡ", - тиҙәр хакимиәттә.

Муниципалитет шулай уҡ ҡойма урынына ҡыуаҡтар ултыртыу участкаларын да асыҡлаған. Ундайҙар бишәү, дөйөм оҙонлоғо 1000 метр, йәғни 410 секция. "Ҡыуаҡтар ултыртыу өсөн уңайлы ваҡыт - көҙгө осор. Үҫемлектәр киләһе йылда ерегә. Яҡшылап ерегеп киткәндән һуң бер йыл үткәс кенә уларҙы матурлап ҡырҡырға мөмкин. Шулай итеп, ҡалған ҡоймаларҙы һүтеү ҡыуаҡтар ултыртҡандан һуң 2-2,5 йылдан һуң ғына планлаштырыла", - тип аңлаталар мэрияла.

***- Рәсәй Эске эштәр министрлығының Башҡортостан буйынса ЮХХДИ бүлегенең юл инспекцияһы һәм хәрәкәтте ойоштороу бүлексәһе начальнигы - бүлек начальнигы урынбаҫары Руслан Исламетдинов белдереүенсә, дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә баш ҡаланың йәйәүлеләр үткәүелдәренең ҡулланыу торошон тикшерә.*** "Тәү сиратта транспорт-йәйәүлеләр ағымы көслө булған урамдар киҫелешенә иғтибар бирелә. Ҡала урамдарын тотоуға ГОСТ талаптары ҡуйыла, уларҙа йәйәүлеләр өсөн юл ҡоймалары ҡулланыу тәртибе аңлатыла. Норматив документтарға ярашлы, улар балалар учреждениелары эргәһендәге юлдар йәки урамдарҙың участкаларында, шулай уҡ йәйәүлеләр ҡатнашлығындағы юл-транспорт һәләкәттәре күп булған ерҙәрҙә көйләнмәгән ер өҫтө үткәүелдәрендә ҡулланыла. Тәпәш ҡоймалар конструкция формаһында ғына түгел, тотош ҡыуаҡлыҡ рәүешендә лә булырға мөмкин, - тип аңлата ул. - Дәүләт автоинспекция хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә Өфө ҡалаһының коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү, башҡа хеҙмәттәр вәкилдәре менән күсмә кәңәшмәләр үткәрә. Ҡоймалар ҡуйыу урыны юл ваҡиғаларын ентекле анализлағандан һуң һайлана. Йылдың тәүге яртыһында баш ҡалала кешеләр йәрәхәт алған һәләкәттәр йыш булған 22 урын барлыҡҡа килгән. Нигеҙҙә, улар күп һыҙатлы һәм хәрәкәт тә көслө, йәйәүлеләр ҙә күп булған юл саттары. Шуға ла бындай юл саттарында - Жуков - Б. Бикбай, Р. Зорге - Галле, Әй - 8 Март, Ҡулса - А. Невский урамдары киҫелештәрендә йәйәүлеләр өсөн ҡоймалар ҡуйылған".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башинформ" Өфөлә булған, машиналарға тротуарға "осоп сығып", юлындағы барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы емереү, шул иҫәптән кешеләрҙе бәрҙереү бер ни тормаған юл-транспорт һәләкәттәрен хәтергә төшөрөргә булды. Ҡалала хәүефле юл саттарының береһе булып Пушкин һәм К. Маркс киҫелеше тора, унда бер нисә етди авария ла күҙәтелде.**

**Нисек кенә тимә, йәйәүлеләр хатта юл эргәһендәге тротуарҙа ла иғтибарлы һәм һаҡ булырға тейеш, тигәнгә ишара булды был.**

**Ксения КАЛИНИНА.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Диабет

❖ 50 грамм кесерткәнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ 30 грамм ялан ҡырҡбыуынына (хвощ полевой) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ эсергә.

❖ Йәйгеһен бер ай дауамында 50 грамм эҫе һыуҙа бешекләнгән һуған, 15-әр грамм укроп һәм петрушка, 7-10 грамм үҫемлек майынан торған салат ашарға. Шунан 10 көнгә туҡталып тороп, салат менән туҡланыуҙы дауам итергә.

### Боғаҡ шешеү

❖ Боғаҡ шешеүҙән (зоб) тигеҙ өлөштә алынған ҡайын еләге япрағы, йәбешкәк (репешок обыкновенный) үләне, татлы тамыр (солодка голая) тамыры, меңъяпраҡ үләне, цикорий тамыры, эт дегәнәге (череда) һәм мәтрүшкә үләндәре, ҡыҙыл марена тамыры, күгүлән (спорыш) үләне кәрәк. Йыйылманың 1 ҡалағына мөлдөрәмә тулы стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минутҡа тиклем ҡайнатырға. 12 сәғәт төнәтергә һәм ашарҙан 15-30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә. Был рәүешле 2-3 ай дауаланырға.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ 2 ҡалаҡ боланутҡа 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм термоста 6 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр тигеҙ өлөшкә бүлеп эсергә.

### Аҙҡанлылыҡ

❖ Тамырлы бер петрушкаға 1 стакан һыу ҡойорға, 5 минут ҡайнатырға, 4 сәғәт төнәтергә һәм көн дауамында эсеп бөтөргә. Төнәтмә менән 1 ай дауаланырға.

❖ Кесерткән һәм ҡайын япраҡтарын бер тигеҙ өлөштә алып, 2 ҡалағына 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 3 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Тәүлек әйләнәһенә 3-4-кә бүлеп эсергә. Был рәүешле 3-4 аҙна дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА әҙерләне.**

✓ *Схемалар төрлө булырға мөмкин, ләкин уларҙы ниндәйҙер түләү индереү, иғәнә биреү һәм башҡа ошондай сығымдар берләштерә. Улар араһында - ниндәйҙер уҡытыуға түләү, медицина йәки хеҙмәт кеңәгәһен рәсмиләштереү.*



*ЙОЛАҺЫН ҺАЙЛАП ЙӨН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Борон тәпәндәрҙе буяу, бигерәк тә төрлө төҫкә, башҡорттар өсөн хас булмаған. Ҡайһы бер әйберҙәрҙе генә тотош йәшелгә йәки күккә буяғандар, был уны сереүҙән һаҡлау өсөн генә тип аңларға кәрәк. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында рәссам В.С. Сыромятников таулы Башҡортостанда бер нисә уғата зауыҡлы ағас әйберҙе һүрәткә төшөрөп алған. Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылындағы күкһел-йәшел тәпән ауыҙы һәм төбө тирәләй ҡыҙыл төҫкә буялған, уртала нигеҙе һәм ҡырҙары ентекләп эшләнгән ҙур өсмөйөштәр төшөрөлгән. Ошо уҡ райондың Яуымбай ауылындағы бер күнәсектең ауыҙы тирәһендәге биҙәк һыҙаты йәшел менән, айырым деталдәре (ҡыя шаҡмаҡтар, тештәр) ҡыҙыл һәм йәшелгә буялған. Орнаменталь ерлек аҫтан ҡыҙыл кәкерсәк менән уратып алынған.

Күберәк ике төҫлө буяу (йәшел, ҡыҙыл) өҫтөнлөк итеүе, биҙәктәрҙең бер төрлөлөгө был ғәҙәттең айырым ауылдарҙа ғына йәшәүен дәлилләй. Бәлки, был ағас һырлау кеүек күп көс талап иткән биҙәү ысулын алмаштырғандыр.

Башҡорт йәйләүҙәренә барып эләккән урыҫ сәйәхәтселәре уларҙың ҡымыҙ менән һыйлау йолаһының айырыуса тантаналы булыуына һәм бының өсөн тәғәйенләнгән һауыт-һабаның зауыҡлығына иғтибар иткәндәр. "Башҡорттар ҡымыҙҙы ағас туҫтаҡтарҙан эсәләр, уны унда ҡайын тамырынан махсус яһалған, тотҡаһы семәрле ижауҙар менән ҡоялар", - тип яҙа этнолог Д.П. Никольский үткән быуат аҙағында. 1897 йылдың йәйендә Һаҡмар буйындағы Темәс ауылына яҡын йәйләүҙәрҙең береһендә 2-се Бөрйән улусы старшинаһы Сөләймәнов Санкт-Петербургтан халыҡ көйҙәрен өйрәнергә килгән С.Г. Рыбаковты ҡабул итә. Ҡунаҡтарҙы тирмәлә балаҫтарға ултыртҡандар һәм шул арала ҡатын-ҡыҙҙар яғын бүлгән шаршау артынан "ҡапҡаслы мискәгә оҡшаған" һауыт һәм бер нисә ағас туҫтаҡ бирәләр. "Хужа беҙҙе ҡымыҙ менән һыйлай башланы, - тип яҙа һуңынан ғалим. - "Тәпән" тип аталған һауыттағы ҡымыҙҙы матур ғына эшләнгән ағас ижау ярҙамында яҡшылап болғатып, туҫтаҡтарға ҡойоп беҙгә бирҙе".



*Семәрле ижауҙар һәм ҡымыҙ туҫтаҡтары. Экспедиция материалдары һәм РЭМ фондынан. Рәссамдары М.Д. Кузнецов һәм И.Ф. Кибальник*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*АЛДАНМА!*

**Эш эҙләү һәр ваҡытта ла ниндәйҙер кимәлдә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Йә эш графигы тура килмәй, йә йәшәгән урындан алыҫ, ә шулай ҙа эш эҙләүсенең алдында торған иң әһәмиәтле күрһәткес - эш хаҡының күләме. Интернет йәки махсус гәзиттә баҫылған иғландарҙың күбеһендә ысынбарлыҡҡа тап килмәгән юғары эш хаҡы күрһәтелә һәм эш эҙләүсе ошо ҡармаҡҡа ҡабып та ҡуя. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, Башҡортостан халҡының яҡынса 70 проценты эш эҙләгәндә бер тапҡыр булһа ла алдаҡ менән осрашҡан. Белгестәр әйтеүенсә, эш тәҡдим итеүселәр артында күпселек осраҡта мутлашыусылар тора. Мутлашыуҙың төп төрө - былай ҙа аҡсаға интеккән эш эҙләүсене "һығып" аҡса талау. Нисек ошондай мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫкә? Ниндәй эш тәҡдимдәре шик уятырға тейеш? Намыҫһыҙ мутлашыусылар ниндәй алымдар ҡуллана? Түбәндәге яҙмала - ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптар.**

# ЭШ ТАБАМ ТИП...



● Күпселек мутлашыусыларҙы кешенең шәхси мәғлүмәте ҡыҙыҡһындырыусан. Был осраҡта эш тәҡдим иткән булып, кешенән эшкә бөтөнләй ҡағылышы булмаған һорауҙарҙан торған анкетаға яуап биреүҙе һорарға мөмкиндәр. Мәҫәлән, унда яҡындарығыҙҙың бәйләнеш мәғлүмәте йәки ҡасан һәм ниндәй суммала кредит алыуығыҙ тураһында һәм башҡа һорауҙар булыуы мөмкин. Шулай уҡ эшкә урынлашыуҙа кәрәге булмаған шәхси документтарҙы һорап, уның күсермәһен эшләүҙәре шулай уҡ шик тыуҙырырға тейеш. Улар был документтарҙы кредит юллауҙа йәки башҡа төрлө ҡулланырға мөмкиндәр. "Әгәр ҙә билдәле компания хеҙмәткәре рәсми эшкә урынлашыуҙы күҙаллап, был документтарҙы һораһа, ебәрергә мөмкин, ләкин исеме ишетелмәгән-белмәгән йәки уның хеҙмәткәренең үҙ-үҙен тотошо ниндәйҙер хәүеф тыуҙырһа, документтарҙы һәм шәхси мәғлүмәтте уларға әйтергә лә, күсермәһен ебәрергә лә ярамай", тип белдерә хоҡуҡ белгестәре.

● Мутлашыусылар ҡулланған тағы ла бер алым аҡса менән бәйле. Схемалар төрлө булырға мөмкин, ләкин уларҙы ниндәйҙер түләү индереү, иғәнә биреү һәм башҡа ошондай сығымдар берләштерә. Улар араһында - ниндәйҙер уҡытыуға түләү, медицина йәки хеҙмәт кенәгәһен рәсмиләштереү, килешеү төҙөү һәм башҡа пункттар булырға мөмкин.

Күпселек осраҡта бындай түләүҙән һуң эш эҙләүсе хеҙмәт урынын да, үҙенең аҡсаһын да күрмәй. Шуға күрә бындай хәлгә тарымаҫ өсөн алтын ҡағиҙәне - ышаныслы, рәсми эш биреүсе бер ҡасан да алдан ниндәй ҙә булһа аҡса һорамай икәнлеген иҫтә ҡалдырыу мөһим.

● Фрилансерҙар күпселек осраҡта уларҙың хеҙмәтен бушлай тотоноусылар менән осраша. Мәҫәлән, тест эше тип ниндәй ҙә булһа күләмле эште башҡарыуын һорай - мәҡәлә яҙыу, социаль селтәр өсөн контент-план төҙөү, дизайн эшләү, бизнес-план эшләү һәм башҡалар. Эш эҙләүсе фрилансер үҙенең ваҡытын бүлеп бирелгән эште башҡара, күрһәтелгән почта адресына ебәрә һәм шул ваҡыттан алып эш биреүсе уның менән бәйләнеште өҙә: телефонды алмай, хаттарға яуап бирмәй йәки башҡа кешене алыуҙары тураһында белдерә. Ә күпмелер ваҡыттан һуң кеше үҙе башҡарған эште интернет биттәрендә күрергә мөмкин. Әлбиттә, тест эштәрен башҡарыуҙы һорарға мөмкиндәр, ләкин улар кешенең бик күп ваҡытын алмай. Шуға күрә тест эше булараҡ бирелгән эштең күләме артыҡ ҙур һәм ул тулы проектты үҙ эсенә ала икән, был мутлашыу түгелме тигән уй тыуырға тейеш.

● Ысынында эштең ниндәй булыуын йәшереү һәм законһыҙ эшмәкәрлектә аралашсы булыу - мутлашыуҙың үтә лә хәүефле төрө, шуға күрә был тоҙаҡҡа эләкмәҫ өсөн вакансия тураһындағы мәғлүмәтте ентекле уҡырға һәм уны тәҡдим итеүсе компания хаҡында тулы мәғлүмәт табырға йыбанмаҫҡа кәрәк. Әгәр ҙә күрһәтелгән вакансия буйынса үтә лә еңел талаптар ҡуйылып, шул уҡ ваҡытта хеҙмәткәргә ҙур эш хаҡы һәм уңайлы эш графигы тәҡдим ителһә, уйланырға урын бар. Йә булмаһа, вакансияның һүрәтләнеше бик тоноҡ булһа ла эш эҙләүселә хәүеф тыуҙырырға тейеш. Ғәҙәттә, бындай иғландар артында законға яраҡһыҙ эшкә йәлеп итеү күҙаллана. Мәҫәлән, "түләүҙәрҙе ҡабул итеүсе оператор" вакансияһының хеҙмәти бурыстарына түләүҙәрҙе ҡабул итеү һәм уларҙы икенсе кешеләргә ебәреү артында кемдеңдер банк иҫәбенән аҡса сығарыу торорға мөмкин. Һуңынан, мутлашыу асыҡланғандан һуң, ғәйепле булып нәҡ оператор ҡалырға мөмкин.

● Шулай уҡ ҙур эш хаҡы тәҡдим ителгән курьер вакансияһы ла шик тыуҙырырға тейеш. Әгәр ҙә был эште ҙур, исеме билдәле, курьерҙы хеҙмәт килешеүе нигеҙендә эшкә алыусы компания тәҡдим итһә һәм курьер нәҡ ниндәй тауар ташыясағы тураһында аныҡ белһә, хәүефле түгел. Ләкин шикле компаниялар, шәхси кешеләр тарафынан ныҡлап төрөлгән пакет-ҡумталар ташыу курьер өсөн хәүефле тамамланыуы мөмкин, сөнки улар эсендә ҡулланылыуға тыйылған матдәләр булыу ихтималлығы ҙур.

● Белгестәр әйтеүенсә, алданмаҫ өсөн вакансиялар ҡуйылған сығанаҡты дөрөҫ һайлау мотлаҡ. Бындай сығанаҡтарҙа тик теркәлеү үткән компанияларҙың ғына эш тәҡдимдәре ҡуйыла һәм һәр иғлан модерация үтә. Иң хәүефһеҙ, рәсми вакансиялар хеҙмәт биржаһында тәҡдим ителә, шулай уҡ "Рәсәйҙә эш" сайтында аккредитация үткән шәхси компаниялар исемлеге менән дә танышырға мөмкин.

● Хеҙмәт хоҡуғы эксперттары эш эҙләгәндә айырыуса компания менән ныҡлап танышырға, рәсми сайтын ҡарарға, уның ниндәй өлкәлә эш алып барыуын белергә, элекке һәм әле унда эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең компания тураһындағы фекерҙәре менән танышырға саҡыра. Ғөмүмән, компания тураһында ни тиклем мәғлүмәт күберәк, ул шул тиклем ышаныслыраҡ. "Бушлай сыр сысҡан тоҙағында ғына була", тигән мәҡәләне онотorға ярамай эш эҙләгәндә. Ғәҙәттә, юғары эш хаҡы тәҡдим ителгән вакансияла кандидаттарға юғары талаптар ҙа ҡуйыла. Әгәр ҙә хеҙмәткәргә талаптар әҙ, ә эш хаҡы юғары икән, бындай вакансияларҙы урап үтеү яҡшыраҡ.

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, Башҡортостанда йәшәүселәрҙең 58 проценты төп эш урынынан тыш өҫтәмә килем сығанағы эҙләй. Айырыуса өҫтәмә эшкә "Сәнғәт, күңел асыу, масс-медиа", "Эшсе персонал", "Маркетинг, реклама, PR" өлкәһендә эшләүселәр мохтаж. Ә "Мәғлүмәти технологиялар", "Сеймал эҙләү" һәм "Юғары менеджмент" өлкәһендә эшләүселәр өҫтәмә эш урыны эҙләмәй.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЯЗА ҠАТЫЛАНДЫ



**Рәсәй Дәүләт Думаһының водитель танытмаһыҙ автомобилдә йөрөгәндәр өсөн язаны ҡәтғиләштергән документтары үҙ көсөнә инде.**

Документтарҙың береһенә ярашлы, руль артына танытмаһыҙ һәм спиртлы эсемлек эсеп йәки наркотик ҡулланған көйө ултырған саҡта 2 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡаралған. Шулай уҡ, әгәр ҙә водитель танытмаһынан мәхрүм ителеп тә рулгә ултырып, икенсе кешенең һаулығына зыян килтерһә, яза рәүешендә уға 5 йылға тиклем мәжбүри эшкә йәлеп итеү һәм 3 йылға тиклем аныҡ вазифалар биләү хоҡуғынан мәхрүм итеү янаясаҡ. Шулай уҡ ғәйепле 3 йылдан 7 йылға тиклем иркенән дә мәхрүм ителергә мөмкин.

Әгәр ҙә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу сәбәпле яһалған авария һөҙөмтәһендә кеше һәләк булһа, водителгә 5 йылдан 12 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителеү янай. Юл фажиғәһе арҡаһында 2 йәки унан да күберәк кеше үлһә, ирекtән мәхрүм ителеү ваҡыты 8 йылдан алып 15 йылға тиклем булыуы мөмкин.

Водитель танытмаһын алдырып та рулгә ултырғандар өсөн 1 йылға тиклем, ә бер нисә тапҡыр был аҙымға барғандарҙы (рецидивистарҙы - йәғни танытмаларынан ҡолаҡ ҡағып та бер нисә тапҡыр рулгә ултырғандар) 2 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡаралған. Шулай уҡ уларға 150 меңдән алып 250 меңгә тиклем штраф йәки 1-2 йыл буйы эш хаҡы һәм башҡа килемдәрен тотоп ҡалыу язаһы янай. Танытмаһыҙ йөрөп тотолғандар шулай уҡ 2 йылға тиклем ҡайһы бер вазифаларҙы башҡарыу хоҡуғынан мәхрүм ителәсәк. Ғәйеплеләргә тағы ла 360 сәғәткә тиклем мотлаҡ эшкә ҡушыуҙы ла ҡулланырға мөмкин буласаҡ.

Рецидивистар өсөн штраф күләмен 200 меңдән алып 300 меңгә тиклем, эш хаҡын йәки башҡа килемен 1 йылдан 2 йылға тиклем тотоп ҡалыуҙы һәм 480 сәғәткә тиклем мәжбүри эште, шулай уҡ 3 йылға тиклем аныҡ вазифаларҙы биләүҙән мәхрүм итеүҙе күҙаллаған документ ҡабул итергә теләйҙәр. Шулай уҡ бер нисә тапҡыр руль артында водитель танытмаһы булмайынса тотолғандар өсөн ғәйепләүсе ҡарар нигеҙендә автомобилен тартып алыу мөмкинлеге лә ҡарала.

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Беренсе бүлек. Таш быуаты.



Боронғо таш быуаты кешеһе ҡорал һәм төрлө биҙәнеү әйберҙәрен яһау мөмкинлеген биргән ҡатмарлы техник алымдар ҡулланыу өсөн кәрәкле бай ғына белем күләменә эйә булған. Ошо йәһәттән Владимир ҡалаһы янындағы Сунгирь тигән урында күмелгән ҡыҙ һәм малай ҡәберенән алынған материалдар ҡыҙыҡлы: улар иҫәбендә иң көтөлмәгәндәренән мамонттың ҡаҙыҡ тешенең (русса - бивень) йыллыҡ ҡулсаларынан эшләнгән 2,42 м һәм 1,66 м оҙонлоғондағы ике һөңгө лә була. Был һөңгөләр ул дәүер кешеһенең мамонттың өс метрлыҡ ҡаҙыҡ тешен һыуҙа йомшартып һәм ут өҫтөндә парландырып тотоп турайтып, уның йыллыҡ ҡулсаларын пластиналарға айырып, таш бысаҡтар менән юнып эшкәртә алыуын күрһәтә.

Үрге палеолит кешеһе мәҙәниәтенә Европа һәм Азияның төрлө райондарында табылған йөклө ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҙур булмаған һөйәк һынсыҡтары ла хас. Ошондай табыштарҙың киң таралған булыуын ғалимдар үҫешкән тәү әсә культы менән бәйләп аңлата. Уралда бындай һындар табылмаған, әммә бында ла ошондай уҡ культтың булыуын фараз итергә мөмкинлек биргән факттар бар.

Боронғо таш быуат кешеһенең уникаль ҡомартҡыһы - Ағиҙел йылғаһы үрендәге (Бөрйән районында) Шүлгәнташ (Капова) мәмерйәһе. Был мәмерйә үҙе үк иҫ китмәле тәбиғәт ҡомартҡыһы булараҡ билдәле. Шүлгән йылғасығы хасил иткән өс ҡатлы тәбиғәт объекты ул. Был йылғасыҡ 4 - 5 саҡрым самаһы ер өҫтөнән ағып килә, шунан кинәт кенә ер аҫтына китеп юғала һәм киңлеге 39 м, бейеклеге 21 м булған арка формаһындағы мәмерйә ауыҙынан ер өҫтөнә килеп сыға.

Геологик тикшеренеүҙәр Шүлгән сығанағының тәүҙә мәмерйәнең өҫкө, шунан урта ҡатынан ағып ятыуын, ә хәҙер инде уның юлағының аҫҡы ҡатта булып, ер аҫтының абсолют тынлығы шарттарында шишмәнең саҡ ҡына ишетелә торған ҡәҙимге шылтырауының резонансланып, гөрләп торған шауға әйләнеүен асыҡлай.

Мәмерйә фәнгә XVIII быуаттан бирле билдәле булһа ла, ул етерлек кимәлдә өйрәнелмәгән. Үрге һәм урта ҡаттарҙағы тар ғына коридор һымаҡ үткәүелдәр йыш ҡына ҙур залдар менән аралаш килә: мәмерйәлә инеү урындары ишелеп төшкән таштар менән күмелгән байтаҡ ҡына башҡа залдар бар, тип иҫәпләнә. Мәмерйәгә ингән урында һәм үрге ҡат төпкөлөндә йыйылып ятҡан һыуҙан бәләкәй генә күлдәр хасил булған.

Яҡшы тәбиғәт шарттары, ҡоро, киң һәм еңел генә инеп йөрөп булған залдар булыуы тәүге тормош кешеһенең иғтибарын йәлеп иткән, һәм яҡынса б.э. тиклем XIV - XI мең йыллыҡтарҙа ул мәмерйәне ныҡлап үҙләштерә алған.

Үрге һәм урта ҡаттарҙағы ҡайһы бер зал стеналарында охра менән төшөрөлгән төрлө һүрәттәр табыла.

Төп һүрәттәр үрге ҡаттың ике стенаһына төшөрөлгән: алты мамонт, ике ат, носорог һүрәттәре улар. Барса хайуандар реалистик манерала һынландырылған һәм һул яҡҡа табан хәрәкәттә күрһәтелгән. Иң һуңғы тикшеренеүҙәр һүрәттәрҙең б.э. тиклем XII - X быуаттарҙа эшләнгәнен асыҡланы. Шуныһы ҡыҙыҡ, һүрәттәр аҫтындағы мәҙәни ҡатламды тикшергәндә таш һәм балсыҡ һауыт ярсыҡтары табыла, уларҙа буяу һаҡланған була. Химик анализ буяу (охра) составында йәнлек елеме булғанлығын асыҡланы.

Шүлгәнташтағыға оҡшаш мамонт һындары һүрәттәре һуңғы йылдарҙа Әшә ҡалаһы янындағы Игнатьев (Ямаҙыташ) мәмерйәһендә лә табылды. Игнатьев мәмерйәһендәге һүрәттәр охра һәм ҡара төҫтәге буяуҙар менән яһалған. Мамонт һәм ат һындары менән бер рәттән, унда кеше һәм башҡа хайуандарҙың һүрәттәре, ниндәйҙер бер таптар һәм билдәләр бар. Бәлки, уларҙың ҡайһы берҙәре һуңғараҡ осорға ҡарайҙыр.

Уҡыусыға ошондай деталь дә ҡыҙыҡлы булыр. XX быуаттың 20-се, 30-сы һәм 60-сы йылдарында Игнатьев мәмерйәһен бер нисә тапҡыр билдәле этнограф һәм археологтар С.И. Руденко, С.Н. Бибиков һәм О.Н. Бадер килеп тикшереп йөрөй. Мәмерйә эсендә улар ҙур булмаған ҡаҙыныу эштәре уҙғара, һөҙөмтәлә бында археологик материалдар, шул иҫәптән кеше һөйәктәре лә табыла. Ә 70-се йылдарҙа бында йәш археолог В.Петрин бер нисә тапҡыр археологик экспедициялар ойоштора, һәм ул тәү башлап стеналарҙа рәсем билгеләре булыуына иғтибар итә. Саҡ ҡына беленеп торған һүрәт эҙҙәрен тикшереү маҡсатында ул күп быуаттар буйына ҡоромға сорналған мәмерйә стеналарын йыуып таҙартырға ҡарар итә. Стеналарҙа ҡором аҫтында һаҡланған рәсемдәр ап-асыҡ булып күренә башлай. Ҡаҙыныу эштәре иҙәндәге мәҙәни ҡатламдың һәм стеналарҙағы һүрәттәрҙең бер үк ваҡытҡа ҡарауын, ә радиоуглерод ысулы уларҙың йәше б.э. тиклемге XII быуат сиктәрендә булыуын асыҡлай. Уралдағы боронғо һынлы сәнғәт өлгөләре Көнсығыш Европа һәм Төньяҡ Азия территорияһында үҙенә күрә берҙән-бер ҡомартҡы булып тора. Уларҙың аналогтары Көнбайыш Европала (Франция, Испания) ла бар, әммә улар стиль үҙенсәлектәре буйынса айырым төркөмдә тәшкил итә. Тикшеренеүселәрҙең берҙәм фекеренә ярашлы, уларҙың барыһы ла дини-мифологик нигеҙҙә күмәк табыныу объекттары булып торған.

Көньяҡ Уралдың боронғо кешеһенең мәмерйә стеналарындағы һынлы сәнғәтендә мамонт айырым урын биләп тора; унан башҡа, Төньяҡ Евразияның күп кенә палеолит тораларында мамонт һөйәктәре өйөмдәре осрай, улар торлаҡ ҡорғанда төҙөлөш материалы, һөңгө һәм башҡа әйберҙәр эшләү өсөн сеймал сифатында ҡулланылған. Ошоға тиклем боронғо кеше тормошонда мамонттың ошондай ролен күп кенә ғалимдар уның һунар объекты булыуы, кешеләрҙең уны, ҡамап алып, алдан әҙерләнгән соҡорға табан ҡыуып алып барып аулауы менән аңлата ине. Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған махсус тикшеренеүҙәр ошо хайуан тураһындағы ҡараштарыбыҙға мөһим төҙәтмәләр индерҙе.

Мамонт - төньяҡтың иң эре йыртҡысы, уның мундаһына тиклемге буйы 3 метрҙан 4 метрға тиклем етә, кәүҙә оҙонлоғо 4 - 4,5 м. Ҡаҙыҡ тештәренең (бивень) оҙонлоғо - 3,8 - 4 м., биш метрлыҡтары ла осрай. Мамонттың ауырлығы 7 тоннаға етә. Бар тәне ҡуйы йөн менән ҡапланған, тиреһенең ҡалынлығы 1,5 сантиметрҙан да күберәк булыуы мөмкин. Тикшеренеүселәр, ошондай ҡеүәтле йыртҡысҡа һунар итеү кеше өсөн хәүефле булыуын билдәләп, уларҙың мамонт һөйәктәрен "мамонт зыяраттары" тип йөрөтөлгән урындарҙан алыу мөмкинлеге хаҡындағы фекерҙе хуплай. Бындай урындарҙы боронғо кешеләр яҡшы белгән һәм үҙ мәнфәғәтендә ҡуллана алған.

Ул дәүер кешеһе үҙен уратып алған донъя хаҡында, Ер шарында тормоштоң нисек барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше хаҡында бик аҙ белгән, уның яҙмышы тулыһынса тәбиғәт шарттарына бәйле хәл ителгән. Ошондай хәлдә көн иткән кешенең аңында Ерҙәге барса тереклектең илаһтар тарафынан көйләнеп, уларҙың кешеләрҙе, йәнлектәрҙе, урмандарҙы, елдәрҙе һәм башҡа тәбиғәт күренештәрен ҡурсалап тороуы хаҡындағы ысынбарлыҡҡа тап килмәгән ҡараштары формалашҡан; кешенең теләһә ниндәй эшенең уңышлы булыуы илаһтар теләгенең ниндәй булыуынан торған. Илаһ-ҡурсалаусыларға ярарға тырышып, улар хөрмәтенә ҡорбандар салынған, төрлө ғөрөфи йыр һәм бейеүҙәр башҡарылған. Һис шикһеҙ, ошондай магик ғәмәлдәр Шүлгәнташтағы һәм Игнатьев мәмерйәһендәге һүрәттәр ҡаршыһында ла башҡарылған булырға тейеш. Билдәле булған материалдар Шүлгәнташ һүрәттәренең боронғо осорҙарҙан хәҙерге заманға тиклем Көньяҡ Уралда йәшәүселәргә билдәле булып, ошо төбәк халыҡтарының фантастик күҙаллауҙарына бик йоғонтоло тәьсир итеүенә дәлил. Мәҫәлән, башҡорт фольклорының күп һанлы ҡомартҡыларында Шүлгән батшалығы, тәрән күл төбөндәге бөткөһөҙ байлыҡтар һәм иҫәпһеҙ күп мал көтөүҙәре хаҡында бәйән ителә. Бында әйтеп үтелгән сюжеттар менән күлдәр, һүрәттәр һәм мәмерйә атамаһына әйләнгән батша исеме араһында туранан-тура бәйләнеш булыуы мөмкин.



*Икенсе һүрәт. Йөклө ҡатын-ҡыҙҙарҙың һөйәктән яһалған статуэткалары - тәү әсә культы символы*



*Өсөнсө һүрәт. Шүлгәнташ мәмерйәһе стеналарындағы мамонт (1,2) һәм ат (3) фигуралары. Охра. Б.э. тиклем 12 - 10 мең йыллыҡтар*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

20 сентябрҙә иртә менән фашистар 60-сы кавполк позицияларына һөжүм башлай. ПТР взводы дошман танкыларына ут аса. ПТР наводчигы, гв. өлкән сержанты Илья Грищенко 2 танкыны сафтан сығара, үҙе лә яралана, әммә һуғыш яланын ташлап китмәй. Ошо батыр егет һуңынан Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Гв. лейтенанты М.К. Нагаевтың артбатареяһы бик ҡыйыу эш итә, мәргән атып, дошман техникаһын, һалдат һәм офицерҙарын юҡ итә. Немецтар полк позицияларын өс тапҡыр атакалай, әммә, күп юғалтыуҙарға дусар булып, кире сигенә. Лопатино ауылы янындағы алышта дошмандың 6 танкыһы ҡыйратыла, 300 һалдаты һәм офицеры һуғыш яланында ятып ҡала.

16-сы (Башҡорт) гв. атлы дивизияһының өс полкы ла дошмандың Чернигов төркөмөн ҡыйратыуға ҙур өлөш индерә. Дивизияның тарихи формулярында ошо хаҡта бына ниндәй мәғлүмәт теркәлгән: "1943 йылдың 17 - 19 сентябрендә дивизияның частары тарафынан 24 торлаҡ пункты азат ителә, шул иҫәптән эреләренән: Мена, Волосковцы, Березна, бер батальондан ашыу пехота юҡ ителә, 400 кеше әсиргә алына. 18 сентябрҙән 21-нә тиклем дивизия һуғыша-һуғыша 150 саҡрымдан ашыу алға китә".

7-се гв. корпусы, Чернигов ҡалаһын төньяҡ-көнбайыштан уратып, бәрелештәрҙә дошмандың байтаҡ көстәрен ҡаҡшыратҡан бер мәлдә, генерал-лейтенант Н.П. Пухов яугирҙары Черниговҡа көньяҡ-көнсығыштан, ә генерал-лейтенант П.А. Белов ғәскәрҙәренең һул флангыһы частары (13-сө һәм 61-се армиялар соединениелары) ҡалаға төньяҡ-көнсығыштан хәл иткес һөжүм башлай. 21 сентябрҙәге берлектәге штурм һөҙөмтәһендә Чернигов ҡалаһы дошмандан азат ителә. Шулай итеп, 16-сы гв. атлы дивизияһы, Чернигов янындағы немец ғәскәрҙәрен ҙур юғалтыуҙарға дусар итеп, ошо боронғо ҡаланы азат итеү өсөн бар көсөн һала. Чернигов ҡалаһын азат иткән совет ғәскәрҙәре хөрмәтенә Мәскәүҙә 124 орудиенан 20 залптан торған тантаналы салют бирелә.

7-се гв. корпусының 14-се һәм 15-се дивизиялары Снов йылғаһының көнсығыш ярында Седнев ауылы өсөн ауыр һуғыш хәрәкәттәре алып бара. Корпус частарына, Ивашковка һәм Выхвостово ауылдары янында дошман оборонаһын емереп, Гомель ҡалаһының көнбайыш яғына үтеп кереп, ундағы немец ғәскәрҙәренең сигенеү юлын томалау бурысы ҡуйыла. 16-сы гв. атлы дивизияһы корпустың 14-се һәм 15-се дивизияларына Снов йылғаһы аша сығыуҙы тәьмин итергә тейеш була. 21 сентябрҙә беҙҙең дивизияға ярҙамға 160-сы танк полкы беркетелә, ул дивизия командиры ҡуйған хәрби бурыстарҙы үтәй. Полкта 12 Т-34 танкы, 27 Т-70 еңел танк була. Полк командиры - майор Дмитрий Джиоев.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Ҡайһы бер ғалимдар фаразлауынса, кеше организмына ғүмере эсендә нисә йөрәк тибеше булырға тейешлеге алдан программалап ҡуйылған. Йүгергән һайын йышыраҡ типкән йөрәктең эш дәүере мөҙҙәте лә тиҙерәк ҡыҫҡара бара…*

*ТАБИП ҺҮҘЕ*

# ИНФАРКТТАН ЙҮГЕРЕП ”ҠАСЫП” БУЛАМЫ?

## Йәки Спорт хаҡында уйынлы-ысынлы фәлсәфә

**Хәрби табип булып эшләгән дәүерҙәге ифрат шаян булған хеҙмәттәшемде - Богданов Виктор исемле медицина подполковнигын хәтерләйем. Невролог вазифаһын атҡарған был коллегам берәй спорт сараһы мәлендә мейе һелкенеүе, йәиһә тағы ниндәйҙер берәй травма алған һалдат йә офицерҙы госпиталгә алып килһәләр, уны ҡарай-ҡарай: "Спорттың тәнгә берәй файҙаһы булһа - йәһүдтәр турниктан төшмәҫ ине…" - тип һөйләнә торғайны. Уставтан тыш мөнәсәбәттәр арҡаһында алынған йәрәхәттәр һымаҡ уҡ, "Спорт травматизмы" тип аталған күренеш тә әрме мөхитендә командование тарафынан һәр саҡ контролдә тотола. Йыш ҡына һалдат һаулығына бәйле бындай "ҡаҙан эсендә", әлбиттә, иң беренсе булып хәрби табиптар "ҡайнай". Оҙон араға йүгереү, һикереү ярышында бәғзе мәлдәрҙә кемгәлер насар булып китеүе - ғәҙәти күренеш. Әлеге Виктор Петрович: "Здоровый человек в спорте не нуждается, а больному - спорт противопоказан!" - тип тә көлдөрә ине.**

"Спорт - һаулыҡ сығанағы", "Спорт - йәшәү импульсы", "Юғарыраҡ! Тиҙерәк! Көслөрәк!" тигән һымағыраҡ ҙур итеп яҙылған плакаттарҙы һәр спорт ҡаласығында, залдарында күрергә була. Йәшерәк сағымда мин шул лозунгыларға һис һүҙһеҙ ышана инем. Даими күнегеүҙәр яһап, хатта бөйөк спортсы булырға хыялланған мәлдәрем дә булманы түгел. Әммә спорт алдынғыһы булған Әхмәр исемле бер дуҫымдың һүҙҙәре мине һүрелдереп ҡуйҙы: "Күпме генә тырышһаң да, һин барыбер мине үтә алмаясаҡһың. Сөнки һиндә "спортсы таланты" тигән нәмә юҡ. Миндә музыкаль һәләт булмаған кеүек. Лутсы һин ана шул ҡурайыңды тартып ҡына йөрө..."

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡасан ғына булмаһын - студент саҡмы ул, йә иһә хәрби хеҙмәттәме, "физик әҙерлек" тип аталған дәрестәрҙән һис кенә лә ҡотолоп ҡалып булмай торғайны. Ниндәйҙер нормативтар уйлап сығарып, баһалар ҙа ҡуялар. Кемдер уларҙы ифрат еңел үтәй, ә кемдеңдер бөтөнләйгә быға һәләте юҡ! Тире аҫтына күпмелер миҡдарҙа май ҡатламы йыйып өлгөргән ир-егеттәр өсөн башҡараҡ, бер аҙ еңелерәк норматив булһасы... Бөтә кешене бер ҡалыпҡа һалыуҙары һис кенә лә оҡшап етмәй торғайны. Бәхеткә, бер ҡасан да үҙем ундай "майлы"ларҙан булманым. Хатта саңғы ярышы буйынса бер мәл институт беренселегенә лә үтеп китә яҙҙым!

Ысынлап та, шундай бер мәҙәк хәл булып алды минең менән. Медицина институтының икенсе курсында уҡып йөрөгән саҡ. Ҡышҡы сессия алдынан физкультуранан "зачет" тип аталған нәмәне алып булмай ҙа ҡуя. Саңғы буйынса биш саҡрымға йүгереүҙән нормативҡа бер нисә секунд еткерә алмай аҙапланам. Беҙҙең менән параллель курста Мәсетле районынан Рәмил Бәҙретдинов тигән бер егет уҡый ине. Саңғы спорты буйынса "Башҡортостандың абсолют чемпионы" тигән исем яулап та өлгөргән ине ул. Бер-нисә мәртәбә талпынып та, әлеге зачетты бирә алмағас, Рәмилгә мөрәжәғәт итергә булдым. "Минең арттан ҡабаландырап, ҡыуып ҡына барсы әле, Рәмил. Зачет тапшыра алмайым". Танышым ризалашты. Уның өсөн ни, йүгереп йөрөп килеү - сираттағы күнекмә һымаҡ ҡына булды инде. Артымдан төшөп алып, "һайт та тайт", тигәндәй тиҙләтеп ҡыуа торғас, арманһыҙ булып, ах-ух килеп, финишҡа барып еттем. Нормативты "бишле"гә үтәгәнмен. Ул ғына ла түгел: саңғы ярышы буйынса институт беренселегенә командаһы исемлегенә лә яҙып ҡуйғандар! Ҡырҡ хәйлә менән тигәндәй, көскә ысҡынып киттем ярыштан...

Физик әҙерлек буйынса икенсе "өлгәшем" оҙайлы әрме йылдарында булды. Турникта күтәрелеү буйынса. Хәҙер нисектер, белмәйем, ә элек офицерҙарҙы дүрт төрлө йәш төркөмөнә бүләләр ине. Иң беренсеһе - егерме һигеҙ йәшкә тиклем, икенсеһе - егерме һигеҙҙән утыҙ бишкә, өсөнсөһө - утыҙ биштән ҡырҡҡа, дүртенсеһе - ҡырҡ йәштән олораҡтар. Хәтерләүем буйынса, иң беренсе төркөмдәгеләр, йәғни йәш офицерҙар өсөн турникта биш мәртәбә ҡалҡыныуға - тик "өслө" билдәһе генә ҡуйыла (мин биш мәртәбә генә ҡалҡына ала инем), ә шунса уҡ мәртәбәне егерме һигеҙ йәштән һуң ҡалҡына алһаң -"дүртле" алаһың. Ә инде утыҙ биштән уҙып та, һәүетемсә "майлы ҡоһағыңды" әлеге биш мәртәбә ҡалҡытырға хәлеңдән килә икән - юғары билдәне, йәғни "бишле"не ҡуялар! Лейтенант саҡта турник буйынса "өслө" генә ала инем. Әммә, йәшем утыҙ бишкә, званием подполковник дәрәжәһенә етеүгә ҡарай, һаман шулай бишәр мәртәбә ҡалҡына барып, тәки юғары баһаға өлгәштем. Ҡорһаҡ тирәһенә "ҡаҙы" йыймаған өсөндәр, тип уйлайым. Уның ҡарауы, бәғзе бер хеҙмәттәштәр йәшерәк саҡта унар мәртәбә ҡалҡынып та, әммә утыҙ биш - ҡырҡҡа яҡынлаша башлағанда, артыҡ йыуанайыу арҡаһында "өслө"гә төшөп киткеләгән осраҡтар ҙа булды...



Спорттың һаулыҡҡа файҙаһы, йә ғүмер оҙайлығына тәьҫире хаҡында ла бер аҙ фекерләп алыу зарур. Хөрмәтле яҡташтарым, кемегеҙ "йөҙйәшәр" спортсменды күргәне бар? Ғүмер буйы ауылда йәшәп, спорттың ни икәнлеген дә белмәгән бәғзе берәүҙәрҙең туҡһан, хатта йөҙгә еткәндәрен ҡайсаҡ күргеләйем. Әммә "Фәлән спортсы үҙенең йөҙ йәшен билдәләй", тигәнде бер ҡасан да ишеткәнем юҡ. Киреһенсә, "Шул марафонсы алтмышынсы йәшендә кинәт кенә вафат булды", йә иһә теге йәки был боксерҙың йыш ҡына мейе һелкенеүе сәбәпле ҡуянсыҡ сиренә һабышыуы хаҡында ишеткеләгәнем бар. Донъя чемпионы Фәләнов штангистың умыртҡа бағанаһы дискы тайыу (межпозвонковая грыжа) сәбәпле операция яһалауы хаҡында ла имеш-мимештәр йөрөгөләй...

Минең ныҡлы инаныуымса, һәр эштә сама белеү кәрәклеге спортҡа ла ҡағылырға тейеш. Иң мөһиме, "артыҡ май" йыймай ғына оло йәштәргә барып етергә тырышыу зарур. Шул уҡ ваҡытта "хәрәкәттә - бәрәкәт" тигәнде лә онотмайыҡ. Хәҙер, әлбиттә, техника заманы. Һәр кемдең аҫтында - машина. Ҡайберәүҙәр әйтмешләй, "бәҙрәфкә лә йәйәү йөрөмөгән" кешеләрҙән булһаң, әлбиттә, тәнеңә, айырыуса йөрәк тамырҙарына зарарлы булған "холестерин" йыйылыуҙы көт тә тор. Күҙәнәктәрҙә барған һәр төрлө химик процестарҙа "янып бөтөргә тейешле" ана шул нәмә арт һанын күтәрергә йыбанған ялҡауҙарҙа артыҡ кимәлдә булыусан икәнен онотоу ярамай. Мөмкин тиклем йәйәү йөрөргә тырышыу (йүгереү түгел!) кәрәк.

Йыш ҡына парктарҙа байтаҡ йәшкә еткән, тулы кәүҙәле кешеләрҙең "һәлп-һәлп" итеп йүгереп йөрөгәнен күрергә тура килә. Был - ҡасандыр үҙенең кәүҙә торошон артыҡ хәс-тәрләмәгән, әммә хәҙер тиҙ генә арала уны ҡабаттан "урынына ҡайтарырға" ниәтләгән кешеләр... Бындай йүгереүҙәр - тик зыянға ғына! Бер нисә саҡрым йүгереп, килә-килеп, беҙҙең Баймаҡ яғында әйтмешләй, "ҡутара" итеп ашап алыуҙан бер ниндәй ҙә файҙа булмай. Ул ғына ла түгел, хатта ана шулай йүгереп барышлай кинәт кенә "туңҡайып" китеүең дә ихтимал, Аллаһ һаҡлаһын. Күп йылдар буйы "май бөргән" йөрәгеңә тик артыҡ көс төшөрөү генә була бындай маташыуҙар. Коронар тамырҙары (йөрәкте артериаль ҡан менән тәьмин итеүсе иң төп парлы тамыр) әллә ҡасан уҡ холестерин ҡатламдарынан тарайып өлгөргән йөрәгең көсәнеүҙе күтәрә алмауы ла ихтимал. Элегерәк бәғзе берәүҙәр "Инфаркттан йүгереп ҡотолоп була" тигән тәғлимәттәр сығарғылай ине. Хәҙер күпселек медицина табиптары быны хупламай. Ә ҡайһы бер ғалимдар фаразлауынса, кеше организмына ғүмере эсендә нисә йөрәк тибеше булырға тейешлеге алдан программалап ҡуйылған. Йүгергән һайын йышыраҡ типкән йөрәктең эш дәүере мөҙҙәте лә тиҙерәк ҡыҫҡара бара...

Динебеҙ күҙлегенән сығып ҡарағанда, Аллаһ Тәғәлә яҙған тәҡдир буйынса кешегә күпме бирелгән, тап ана шунса ғына була инде йөрәк тибеше. Быны ла дөрөҫ аңлау кәрәк. Һинең үҙеңде ҡарауың, хәстәрләүең, һаҡланыуың - барыһы ла ана шул тәҡдиреңә сәбәп. Ялҡауланып, мейес башында һимереп тик кенә ятаһың икән - ул да һинең тәҡдирең... Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм һәр нәмә өсөн сәбәп ҡылырға ҡушҡан. Иген үҫһен өсөн дә башта уны сәсергә, унан - уңыш көтөү тейешле...

Кемдәр инде артыҡ йыуанайып өлгөргән, улар был тормошта бөтә нәмәнән мәхрүм ҡалған, тип уйлау ярамай. Артыҡ килограмдарыңды ташлау бер ваҡытта ла һуң түгел. Ундайҙарға тик ашау стилен бер аҙ самалау ғына кәрәк. Иң беренсе нәүбәттә - углеводҡа бай булған ашамлыҡтарҙан (шәкәр, торт, пирожное, аҡ икмәк, макаронлы аш һ.б.) бөтөнләйгә тиерлек баш тартыу мөһим. Ашаған саҡта өҫтәл тирәһендә оҙаҡ ултырмай, яртылаш туйған килеш тороп китеү хәйерле (нәфсеңде еңеп, шулай итһәң, бер аҙ туймағаның шунда уҡ онотола). Үҫемлек күҙәнәклегенә (растительная клетчатка) бай булған ашамлыҡты - йәшелсәләрҙе йәйен-ҡышын өҫтәлдән өҙмәү хәйерле. Әммә, әлеге әйтмешләй, ҡапыл ғына ябығыу ниәте менән көндәр, хатта аҙналар буйы аслыҡ диетаһына ултырып, тағы эште харап итеүең мөмкин.

Организмға һәр файҙалы матдә даими инеп торорға тейеш. Бәғзеләр асығыу диетаһын ураҙаға тиңләп хаталана. Ураҙа, тигәндәй, йылдың ниндәй генә миҙгеленә тура килмәһен, уны ҡалдырыу ярамай, ул тик артыҡ ашауҙы ғына сикләй. Ураҙа тотҡан кешенең ашҡаҙан күләме кискә тиклем бер-ике тапҡырға кесерәйеп өлгөрә. Кемдәр ураҙа тота, улар был күренеш менән яҡшы таныш: кисен ифтар мәлендә әллә ни артыҡ ашап булмай. Хатта ғәҙәттәге ашағанға ҡарағанда ике мәртәбә аҙыраҡ ашау ҙа туйҙыра (Әммә ураҙаның төп маҡсаты - диета тугел, ә Аллаһ Тәғәләнең беҙгә мотлаҡ тип ҡушҡан бойороғон үтәп, Уның ризалығына ирешеү. Ураҙаның Ислам дине терәктәренең береһе икәнлеген онотоу ярамай). Башҡа ваҡыттарҙа ла Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм ашағанда ашҡаҙандың өстән бер өлөшөн генә ҡуйы аш, икенсеһен шыйыҡса менән тултырырға кәңәш иткән. Ә ҡалған бер өлөшө буш ҡалырға тейешлеге хаҡында әйткән. Тағы бер хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙҙең әҙәм балаһының ҡорһағы тик ер менән (үлгәс кенә) туйынасағы хаҡында ла әйткәнлеген беләйек. Хәҙерге ваҡытта һәр ҡайһыбыҙҙың өҫтәлендәге ризыҡ - батшаларҙыҡы һымаҡ бит! Ни генә юҡ унда! Әйткәндәй, гелән тәмле-томло аҙыҡтар

✓ ***Был тәжрибә генә булып ҡалмаһын ине, сөнки интеллектуаль уйындар, ысынлап та, уҡыусыға предметтарҙы үҙләштереүгә ярҙам итә, уҡыу сифатын яҡшырта.***



менән генә тукланыу арҡаһында боронғо батшаларҙың күпселеге йәшләй генә көйө донъянан китеп торғанлығы хаҡында ла хәрби медицина академияһында лекция тыңлағаным хәтерҙә ҡалған... Бабичыбыҙ ҙа бер шиғырында "Форсат бирмә ҡорһаҡҡа, ҡорһаҡ туймаç һис саҡта..." тип яҙған. Бына ошо хаҡта бер аҙ фекерләп алыуҙы кәрәк тип таптым. Минең менән ризалашмаған уҡыусыларҙың да күп булыуын күҙаллайым. Уларҙың һүҙен дә тыңларға әҙермен.

Мәҡәләм һуңында бөгөн йәш егеттәребеҙгә спортҡа ҡағылышлы ифрат мөһим бер кәңәш бирергә ниәтем. Спорт алдынғылығын яулап алыу ниәтендә йәиһә үҙенең тышҡы тәнен "мускулдар" менән биҙәү маҡсатында ҡайһы бер йәштәр андроген гормондары ҡулланыуғаса барып етә. "Андрос" - "ир" тигәнде аңлатҡан боронғо грек һүҙе. Икенсе тел менән әйткәндә, был гормон кеше организмын "ирҙәрҙә" тотоу өсөн яуаплы. Нормала ул һәр ир-егеттең енес биҙҙәрендә күрәгенсә миҡдарҙа бүленеп сығып, ҡанға таралып торған "эске" секрет. Ана шул гормон тәьҫирендә ир кешелә ҡалын тауыш, мускулдарҙың ирҙәрсә үҫеше, ҡаршы енес (ҡатын-ҡыҙ) вәкилдәренә ҡарата айырыуса тойғолар һәм башҡа бик күп кенә йәшәү процестары һаҡланып килә. Ә медицинала ана шул гормонды дарыу итеп, "мышечная атрофия" тип аталған синдромдарҙы дауалау өсөн, оҙаҡ ваҡыт хәрәкәтһеҙ ятҡан ауыр хәлдәге пациенттарға ҡулланалар. Әгәр ҙә мәгәр һап-һау ир-егет шундай гормонды ситтән, йәғни укол ярҙамында ала башлай икән, уның мускулдары бик тиҙ арала үҫешеп, малайҙар теле менән әйткәндә, ул "ҡачок"ҡа әйләнеүе мөмкин.

Бер уйлағанда, бының ниндәй насар яғы бар, шулай бит? "Ялтырап торған" ир-егет һәр төрлө ярыштарҙа - беренсе. Ныҡ үҫешкән мускулдарын уйнатып, йәш ҡыҙҙарҙың йөрәктәрен "зымбырҙатыуҙары" - үҙе ни тора... Әммә бындай "атлетизм"дың нәтижәһе - күңелһеҙ, хатта аяныслы! Укол аша ана шул "ирҙәр препаратын" ала башлау менән, егеттең үҙенең енес биҙҙәре әлеге гормонды (тестостерон тип атала ул) бүлеп сығарыуҙан туҡтала. Күпмелер ваҡыттан был ир-егет укол ҡаҙатмай башлаһа (ғүмер буйы укол менән йәшәп булмай), шул арала енес биҙҙәренең функцияһы өлөшләтә йә иһә бөтөнләйгә һүнеп тә өлгөргән була (медицинала бындай күренеш - атрофия тип атала). Йәшенең икенсе-өсөнсө тиҫтәһен генә ҡыуып барыуына ҡарамаҫтан, күптән түгел көсөн ҡайҙа ҡуйырға белмәгән, типһә - тимер өҙөрҙәй был ир-егеттең ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата мөнәсәбәте "йомшарыуы", хатта бөтөнләйгә һүнеү ихтималлығы бар! Ә уның әле энергияһы ташып торған йәш ҡатыны улай-былай итеп ҡарап та, аптырағас, яттарға китеп барыуы - гәжәп түгел. Хөрмәтле егеттәр, бына ошондай осраҡтарҙан да һаҡ булайыҡ!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

*АФАРИН!*

# ҺӘР САҠ ҮҘ КӨСӨҢӘ...

## үҙ белемеңә генә ышан!



**(Башы 1-се биттә).**

**Ғәҙәттә, ҡыҙҙар бала саҡтан ҡурсаҡ уйнарға ярата, сағыу төҫтәргә тартыла. Нимәһе менән аҡлы-ҡаралы уйын һине үҙенә нығыраҡ йәлеп итте? Шашка менән нисә йәштән ҡыҙыҡһына башланың?**

- Бала саҡ, ысынлап та, тормоштоң иң сағыу мәле. Бар ҡыҙҙар кеүек, мин дә ҡурсаҡ уйнарға яраттым һәм ҡурсаҡ уйнап үҫтем, әммә ҡатмарлы леголарҙы, паззлдарҙы йыйыу буйынса башҡаларҙан айырылып торғанмын. Шуғамы икән, Әлшәй районының Иҙрис ауылында йәшәгән Сәүиә өләсәйем йәйге ял ваҡыттарында, беҙ ауылға ҡайтҡанда, йылап ҡына мине шашка уйнарға ылыҡтырған. Уның менән күп ваҡытты шашка уйыны уйнап үткәрә инек. Шуға был уйынға ҡыҙыҡһыныу бәләкәй саҡтан ҡабынған, уны минә өләсәйем һалған, тип әйтә алам. Баш ҡалалағы Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡыуым менән дә бәхетлемен, сөнки был белем усағында бик күп түңәрәктәр, шул иҫәптән шашка түңәрәге лә эшләй һәм мин беренсе класҡа уҡырға ингәс тә, һайлау турың үтеп, күнекмәләргә йөрөй башланым. Йәғни, һеҙ әйткәнсә, аҡлы-ҡаралы аҡыл уйынына ҡыҙыҡһыныуым бәләкәйҙән барлыҡҡа килгән һәм әлегә тиклем дауам итә, әммә хәҙер инде ул юғары кимәлдә бара.

**Шашка, шахмат - логикаға ҡоролған уйын. Нигеҙҙә, уларҙы үҙ итеүселәр математиканы яҡшы үҙләштерә. Был ысынлап та шулаймы, әллә шахматсыларға-шашкасыларға барлыҡ фәндәр ҙә еңел биреләме? Һинең өсөн ауыр фән бармы?**

- Ысынлап та, шашка-шахмат уйындары логикаға ҡоролғанлыҡтан, минең өсөн математика, башҡа теүәл фәндәр генә түгел, барлыҡ предметтар ҙа еңел бирелде. Шулай ҙа бар шашкасылар өсөн дә яуап бирә алмайым, сөнки һәр кем фәндәргә үҙенсә ҡабул итә. Бәлки, кемгәлер ҡайһылыр фән ауыр биреләләр. Үҙем өсөн ауыр предметҡа килгәндә, әйтһәм, көләрһегеҙ инде: ғәмәлдә минә мәктәптә иң ауыры рәсем дәресе булды. Музыкаға һәләтем бар, апайым һәм ҡустым кеүек үк баш ҡаланың Нариман Сабитов исемендәге 1-се музыка мәктәбе филиалында уҡыным, думбырала уйнайым, әммә бына һүрәт төшөрөүгә һәләтем юҡ инде...

**Төрлө ярыштарҙа йөрөргә тура килә, унда атай-әсәй оҙатып йөрөймө, әллә улар өйҙә генә борсолоп, "янып-көйөп" ултырамы? Ғөмүмән, эргәлә атай-әсәй булғанда уйнауы еңелерәкме, әллә, киреһенсә, улар булмағандамы? Ярыштар барышында кем нығыраҡ тулҡынлана: Айгизәме, әллә атай-әсәйме?**

- Башланғыс синыфтарҙа әсәйем йәки туғандар ярыштарға оҙатып йөрөй торғайны, һуңынан, үҫә төшә, Башҡортостандың йыйылма командаһы составында ярыштарға тренер етәкселегендә йөрөй башланыҡ. Йылына дүрт-биш тапҡыр төрлө ярыштарға йөрөргә тура килде. Әлбиттә, һәр атай-әсәй балаһы өсөн сара, уйын барышында ғына түгел, өйҙән сығып китеүең менән борсола башлай инде ул. Әсәйем һәр тур алдынан шылтыратып, өгөт-нәсихәтен уҡып, фатихаһын бирә - шул ярҙам итә. Бәләкәйерәк ваҡытта, бәлки, иғтибар итмәгәнмендер, әммә хәҙер уларҙың миңә ҡарағанда нығыраҡ тулҡынланғанын тоям. Шуға миңә ҡайһы саҡ эргәмдә яҡын кешеләрем булмағанда, үҙем генә булғанда уйнауы тынысыраҡ, ә ҡайһы бер ваҡыттарҙа әсәйемдең эргәмдә булыуы етешмәй. Төрлө мәлдәр, төрлө ваҡыттар була. Улар бер-береһенә һис оҡшамай.

**Шашка уйыны таҡта шаҡмаҡтарының ҙурлығы һәм атамалары менән айырыла, мәҫәлән, рус шашкаһы, халыҡ-ара шашка һ.б., һинең өсөн уларҙың ҡайһынында уйнау ҡыҙыҡлыраҡ?**

- Бала саҡта, әлбиттә, өләсәйем шашка уйнарға өйрәткәндә уның ниндәй шашка икәнен дә белмәгәндер, бәлки. Уға баланы нимә менәндер әүрәтеү, ваҡытын файҙалы үткәреү мөһим булғандыр. Хәҙер иһә, шашка, тиһәң, күптәр уның төрҙәрен белә, айыра, йәғни хәбәрҙар. Ысынлап та, шашка уйынының төрлө төрҙәре бар. Рус шашкаһы, мәҫәлән, алтмыш дүрт шаҡмаҡлы булһа, халыҡ-ара шашка - йөҙ шаҡмаҡлы. Миңә йөҙ шаҡмаҡлы шашкала уйнау нығыраҡ оҡшай, сөнки унда төрлө комбинациялар эшләү мөмкинлеге лә күберәк. Әгәр шашканы ижади процесс тип ҡараһаҡ, халыҡ-ара шашка таҡтаһында ижад өсөн киңлек ҙурыраҡ, иркенерәк. Шул яғы менән ул үҙенә ылыҡтыра.

**Хәҙер тәжрибә рәүешендә мәктәптәрҙә уҡыу системаһына йылап шахмат дәрестәре индерелә. Был интеллектуаль уйындың уҡыу процесына ыңғай йоғонтоһо бар, тип иҫәпләй белгестәр. Шахмат дәрестәренә альтернатив рәүештә шашка дәрестәрен индереү өсөн ниндәй дәлилдәр килтерә алаһың?**

- Был тәжрибә генә булып ҡалмаһын ине, сөнки интеллектуаль уйындар, ысынлап та, уҡыусыға предметтарҙы үҙләштереүгә ярҙам итә, уҡыу сифатын яҡшырта. Уйын, уйлау процесы ике төрҙә лә бер тигеҙ булһа ла, шахмат дәрестәренә альтернатив рәүештә шашка дәрестәре индереү күпкә отошлораҡ булыр ине, тип уйлайым, сөнки шашка уйынында ҡағиҙәләр еңелерәк. Әйткәндәй, мин уҡыған 158-се Башҡорт гимназияһында шашка дәрестәре индерелгән һәм уңышлы тормошҡа ашырыла, белем усағынан республика, Рәсәй кимәлендәге билдәле шашкасылар сыға. Уҡыусылар башҡа йүнәлештәр буйынса ла һынатмай. Был үҙе үк тәжрибәнең ыңғай һөҙөмтәһен раҫлап тора, минеңсә.

**Бөгөнгә шашка буйынса күп ярыштарҙа булдың, төрлө кимәлдәге еңеүҙәрең менән лайыҡлы маҡтана алаһың. Шулай ҙа иң төп ҡаҙанышың тип ҡайһы еңеүеңде иҫәпләйһең?**

- Һәр ярыш үҙенең үҙенсәлеге, уңышы менән айырылып тора. 2010, 2017 йылдарҙа Европа чемпионатында беренсе урындар яулауым иң әһәмиәтлеһе булһа, быйыл Ижау ҡалаһында рус шашкаһы буйынса Рәсәй беренселегендә уйындың ике төрөндә беренсе урындар яулауым иң ҙур ҡаҙанышым тиер инем, сөнки был еңеүем мине спорт мастеры дәрәжәһенә күтәрҙе. Әле танытма тапшырылыуын көтәм.

**Шашкасылар араһында кумирың бармы? Булһа, кем һәм ни өсөн тап ул?**

- Бәләкәй саҡта өлкән шашкасыларҙың барыһы ла кумир, өлгө ине. Йылдар үтеү менән, бәлки, тәжрибә һөҙөмтәһелер, Александр Михайлович Шварцмандан өлгө алам, уның уйынын ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам, сөнки улар үҙенсәлеге, көтөлмәгән комбинациялары менән айырылып тора.

**Шашка-шахмат уйнағанда бер нисә йөрөштө алдан күҙаллайһың, ул йөрөштәр өсөн варианттар әҙерләйһең. Ә бына тормошта төрлө ситуациялар була, улар өсөн дә алдан әҙерләнгән варианттарың бармы, әллә теге йәки был ситуацияла нимә эшләргә белмәй аптырап ҡалаһыңмы?**

- Бик ҡыҙыҡ һорау. Ул ситуацияларҙы бер нисә генә тимәҫ инем. Шашка уйнағанда, позицияһына ҡарап, ундан да күберәк йөрөштө алдан күҙаллайһың. Шулай уҡ ул иғтибарҙы туплауға өйрәтә, йыйнаҡлыҡ тәрбиәләй. Ошолар барыһы бергә шәхсән миңә тормошта ла ярҙам итә һәм төрлө, хатта көтөлмәгән хәл-ваҡиғанан сығыу варианттарын тиҙ генә уйлау мөмкинлеген бирә. Шуға, ниндәйҙер мәлдәрҙә аптырап, ҡаушап ҡалам, тип әйтә алмайым.

**Спортсылар өсөн, ғөмүмән, каникул да, ял да юҡ, тигәндәй. Интеллектуаль спорт төрөн һайлаусылар ҡасан һәм нисек ял итә?**

- Эйе, дөрөҫ әйтәһегеҙ, спортсылар ялдарын ярыштар бөткәс кенә планлаштыра ала, сөнки күнекмәләр һәр ваҡыт бара, хатта улар өйҙә лә туҡтамай. Ә инде ял әләкһә, уны ауылда үткәрергә яратам.

**Иң ҙур хыялың?**

- Хыялдарым бик күп, һәр йәш кеше кеүек үк, уларҙың, бәлки, буй етмәҫтәйе лә барҙыр, ни тиһәң дә, йәшлек максимализмы һәр осор йәштәренә лә хастыр ул. Әммә мин хыялдарым менән бүлешергә, уларҙы ҡысҡырып әйтергә яратмайым.

**Тиҫтерҙәреңә ниндәй теләктәр еткерер инең?**

- Әлеге ваҡытта барыбыҙ ҙа юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү мәшәҡәте менән мәшғүлбеҙ. Белем алыуын артабан да дауам итеү юлын һайлаған тиҫтерҙәремә маҡсаттарына өлгәшеүен, һәр ҡайһыбыҙҙың хыялы тормошҡа ашыуын теләйем. Тағы ла: һәр саҡ үҙҙәренә, үҙҙәренең көстәренә, белемдәренә ышанһындар!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ысынлап та, үткән менән йәшәү дөрөҫ булмаҫ. Элекке һымаҡ һөйөү булмаҫ инде булыуын, әммә бәхет төшөнсәһен башҡасараҡ аңларға ла ваҡыт еткәндер. Бер-береңде ихтирам итеү, аңлаша белеү бәхет нигеҙен тәшкил итә.***




* * *

Камила бирелеп үҙенең эшенә кереште. Бөтә ваҡытын мәктәптә үткәрҙе. Шулай ғына ул йөрәкте ашаусы уй-хәсрәттәренән арыныр ине. Балалар менән аралашыу йәшәүгә дәрт, күңелгә көс бирҙе. Уҡыусылары уны шул тиклем яратты. Үҙҙәре лә апайҙарына хәлдәренән килгәнсә ярҙам итергә тырыштылар. Күңел яраларын бөтәштереүҙә. Киләсәккә ышаныс менән ҡарауҙа. Кескәйҙәр йөрәге үтә лә һиҙгер була шул.

Үткән ваҡыт эсендә ул бер генә тапҡыр ҙа Ғәзинурҙың исемен әйткәне булманы. Гүйә, был кеше уның өсөн үлде. Ул ҡайҙа, ни эш бөтөрә, уңыштары ниндәй, ҡайтып йөрөймө, ҡатыны менән нисек йәшәйҙәр - һорашҡаны ла, ҡыҙыҡһынғаны ла булманы. Үҙ эсенә йомолдо. Ҡыҙы ниндәй хәбәр менән йәшәй, киләсәге тураһында нимә уйлай - әсәһе был турала белә алманы. Элекке Камила түгел ине ул. Әйтерһең, алмаштырып ҡуйҙылар. Етди, талапсан. Нимәләр уйлап сығара, ойоштора, тәҡдим итә, яңылыҡ эҙләй, күтәреп ала, тәүәккәл генә атҡарып ҡуя. Мәктәп эшен шундай итеп алып барҙы - исемен район мәктәптәрендә лә яҡшы беләләр.

Ике йылдан уңған, тынғыһыҙ уҡытыусыны Иҫән тулы булмаған урта мәктәбенә уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса мөдир итеп эшкә саҡырҙылар.

* * *

Иҫән ауылында эш башлауға ярты йыл үтеп китте. Ҡышҡы кистәрҙең береһендә өҫтәл артында дебет шәлгә төрөнөп, яҙыу-һыҙыу менән булышҡан бер мәлдә, фатир хужабикәһе ишекте асты.

- Ҡыҙым, һиңә ҡунаҡ килгән.

Камила күтәрелеп ҡараны. Ҡаршыһында ҡояштай балҡып, мәктәптә бергә уҡыған синыфташы Илфат баҫып тора ине. Ҡыҙ үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Әкрен генә урынынан торҙо, ике ҡулын алға һуҙып, Илфатҡа табан атланы. Сәсе элеккенән дә ҡараҡ һымаҡ. Ниндәй мыҡты кәүҙәле булып киткән! Етмәһә, мыйыҡ үҫтереп ебәргән бит әле килештереп. Маңлайында һырҙар барлыҡҡа килгән. Бына шулай кеше олпатланалыр инде. Илфат унан ҡарашын айыра алмайынса, һаман йылмая.

- Үҙеңде бер ҡосаҡлайым әле, синыфташ! Рөхсәт итһәң!..- Унан тағы ла Камилаға тултырып ҡараны. - Һин элеккенән дә һылыуыраҡ булып киткәнһең!..

Илфат Ҡаҙанда мединститутты тамамлағандан һуң Себер яғына сығып киткәйне. Шунан бирле күрешкәндәре булманы.

- Рәхмәт, йылы һүҙеңә, дуҫҡайым! - Камила ихлас яуапланы. - Ә һин отпускыға ҡайттыңмы?

- Юҡ, бөтөнләйгә. Мин хәҙер Стәрлетамаҡта, Камила.

Үткәндәрҙе иҫләп бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙылар. Ахыр килеп, Илфат тел осонда торған һорауын бирмәйенсә булдыра алманы.

- Мин һеҙҙе... Ғәзинур менән бергәләр, тип уйлай инем. Бөтәһе лә хәл ителеп бөткәйне бит...

Камила ситкә ҡарап моңһоу йылмайҙы.

- Һуңғы һынауҙы үтә алманыҡ. Уны үҙебеҙ ҡатмарландырҙыҡ. Хәҙерге аҡыл юҡ ине ул саҡта. Беренсе һәм тәүге мәртәбә йәшәгәс... Бик аҡыллы, теүәл булыр өсөн һәм мәргән атыр өсөн ҡат-ҡат йәшәп ҡарарға кәрәктер ул.

- Шулай ҙа, Камила...

- Хәҙер уйлап та ҡуям, бәлки, шулай кәрәк булғандыр... Унан өҫтәйем: икебеҙ өсөн дә бөтә йәшәү йәме емерелер булғас, нишләп шулай кәрәк булһын, ти инде?.. Мин уны әлегә тиклем күргәнем юҡ. Уның да осрашырға ҡыйыулығы етмәй, ахырыһы. Ышанаһыңмы-юҡмы, беҙҙең һаман да аңлаша алғаныбыҙ юҡ. Уртаға бик ҡалын, бейек кәртә ҡуйылды.

Илфат башын ҡалҡытты.

- Мин дә бит шулай көслө яраттым. Ул ҡыҙҙы һөйгән шикелле берәүҙе лә ярата алманым.

- Был осраҡта кәңәш бер генә төрлө: уның өсөн көрәшергә кәрәк. Әгәр һуң түгел икән... Мөхәббәттә ҡурҡаҡ булма. Ғәзинур ҙа шулай...

- Ғәзинур?.. Эх, Камила, һин мине аңламаның!

- Нишләп? - Камила аптырап егеткә ҡараны, уның төҫө үҙгәреп китте.

- Ул - һин, Камила. Был - йөрәк түрендә һаҡлаған иң ҡәҙерле серем.

Камила, ғәжәпкә ҡалыуын һиҙҙермәҫкә тырышып, йылмайҙы.

- Илфат, һин бит Ғәзинурҙың иң яҡын дуҫы булдың.

- Эйе, булдым, һине йәнә лә бер мәртәбә күрер өсөн кескәй әҙәм балалары ла үҙгәрә бит. Хәҙер бер-беребеҙгә яҡын килергә лә ҡурҡабыҙ, буғай. Шул уҡ Ғәзинурмы ул, шул уҡ түгелме? Ә Камила?..

- Ни өсөн ошоға тиклем ул һине бер тапҡыр булһа ла күрергә көс тапмаған? Ғәфү итенер өсөн булһа ла. Был һиңә күп нәмә тураһында һөйләй түгелме, Камила? Уның урынында булһам, һине эҙләп ете диңгеҙ кисер инем... Камила, сыҡ миңә кейәүгә! Һине бәхетле итер өсөн бөтәһен дә эшләйәсәкмен!..

Камила урынынан тороп баҫты. Дебет шәле һыпырылып иҙәнгә төштө. Ҡыҙ быны һиҙмәне, буғай. Илфатҡа яуап итеп әкрен генә баш сайҡаны.

- Беҙҙе яралы үткәндәр бәйләй. Ҡайҙа барһаҡ та, нимә эшләһәк тә, бер кеше арабыҙҙа торасаҡ. - Камила Илфаттың

- Ғәзинурға ҡарашың үҙгәрмәнеме?

- Миндә ике тойғо көрәшә. Улар алышы туҡтамаҫ, ахырыһы. Ә, бәлки, миндә ике Камила йәшәйҙер? Баяғы һүҙең... онотманыңмы, тиһеңдер. Юҡ, Илфат, онотманым. Оноторлоҡ көс юҡ миндә.

Илфат урынынан тороп баҫты. Тәҙрәнән тышҡа ҡараны.

- Илфат, үҙең тураһында ла һөйлә. Өйләндеңме?

Егет баш сайҡаны. Яңынан Камила эргәһенә килеп ултырҙы.

- Юҡ, Камила.

- Осратырһың, табырһың.

Илфат ҡыҙҙың ҡулдарынан тотоп алды.

- Әйт әле, Камила, үҙеңде үткәнгә бағышлап йәшәү бәхетһеҙлек түгелме ни?

- Илфат, мин бик күптәр татымаған иң ҙур тойғоно кисерҙем. Мин бөтә йөрәктән яраттым һәм яратылдым. Ул эҙһеҙ генә, тиҙ генә юғалмаясаҡ, юйылмаясаҡ. Юҡ, Ғәзинур ҙа мине бер ҡасан да онотмаясаҡ - быны беләм. Моғайын, бындай көслө хис-тойғо менән кеше үҙ ғүмерендә бер мәртәбә генә яна алалыр. Ҡалғандары ҡабатлау ғына. Бая әйтмешләй, ҡабат-ҡабат йәшәү шыма, хатаһыҙ йәшәүгә килтерер ине. Ләкин уны ысын мәғәнәһендә "йәшәү" тип атап булмайҙыр... Һөйөүем дә, яныуым да тик үҙемдеке.

генә мөмкинлек тә ине бит ул. Мәктәптә генә түгел! Ни өсөн мин Өфө-Ҡаҙан юлын йыш тапаны, тиһең?.. Тик һин генә мине күрмәнең, барлығымды тойманың. Был матур сихри күҙҙәр бүтән берәүҙе - тик Ғәзинурҙы ғына күрә ине шул. Һәм был күҙҙәр бәхетле ине. Мин һоҡланып туя алмаған күҙҙәр...

- Илфат, дуҫҡайым, ҡалдырайыҡ был һөйләшеүҙе.

- Юҡ, уны ҡасан да булһа һиңә әйтергә тейеш инем. Хәтерләйһеңме, беҙ күмәкләшеп, синыфташтар менән ҡырға сыҡҡайныҡ, һиңә бер ҡосаҡ томбойоҡ сығарып биргәйнем. Шул саҡта һиңә бөтәһен дә әйткән һымаҡ инем. Үҙем ҡосаҡлаған сәскәләр аша... Уларҙы күкрәгеңә ҡыҫҡан килеш һин Ғәзинурға төбәлдең. Шундай шат, шундай сағыу... Мин башты эйеп, ситкә атларға мәжбүр булдым, һеҙҙе айырыр көс юҡ ине. Хәҙер ҙә быға ышаныуы ҡыйын, һуңынан да...

- Бөтәһе лә еңел генә сиселеш тапты, - Камила байтаҡ өнһөҙ ултырҙы. - Минең өсөн Ғәзинур донъяла иң көслө кеше ине. Уның шул көсөнә, тәүәккәллегенә ышандым. Үҙемә тәүәккәлерәк булырға кәрәккән икән. Йәшәй-йәшәй ул да бер аҙ үҙгәргән, мин дә... Тимәк, уға элеккесә, мәктәптә уҡығандағы һымаҡ, ҡарарға тейеш булмағанмын. Тормош ҡына түгел,

ҡулынан тотто. - Яратҡан дуҫым булып ҡал! Бәхетле ит мине шулай!..

Был һөйләшеүҙән һуң Илфат бер нисә мәртәбә килеп китте уның янына. Камила егетте өмөтләндермәне. Ахыры, үҙе лә аңланы. Шулай ҙа тәүге осрашыуға ике йыл үткәс кенә өйләнде. Камила был турала ишеткәс, дуҫына бөтә күңелдән бәхет теләне. Илфаттың туй алдынан ебәргән открыткаһын әле лә ҡәҙерләп һаҡлай: "Мин мөхәббәттең ялҡынында көйөүҙән, көтөүҙән ҡурҡманым, ләкин мөхәббәтем булды яуапһыҙ, һөйгәнеңдән һөйөл, үҙең һөй, мөхәббәтең менән ҡауыш, Камила!"

Уның Ғәзинур янына барғанын ишетте ҡыҙ. Нимә тураһында һөйләшкәндәрҙер, билдәһеҙ, әммә йәй Ғәзинурҙың Иҫәнгә килеп, үҙен эҙләгәнен ишетте. Ул ваҡытта Камила дуҫтары менән сәйәхәткә сығып киткәйне, осраша алманылар. Ғәзинур!.. Телефон номерын ҡалдырған. Ҡағыҙ киҫәген уста йомарлап оҙаҡ ултырҙы Камила. Бәлки, уның бөтә яҙмышы ошо номерҙалыр? Юҡҡа эҙләмәгәндер бит уны Ғәзинур? Шылтыратырғамы? Үткәндәр шәүләһе артынан йөрөү түгелме был? Әгәр ҙә Камила уйлағанса булһа, Ғәзинур барыбер уның янына килергә тейеш тә баһа!

Бүтәнсә булһа?.. Ҡыҙ шылтыратманы.

Курсташы Рәхим Өфөнән районға экспедицияға килешләй уны үҙе эҙләп тапты. Студент йылдарын хәтерләп, оҙаҡ һөйләшеп ултырҙылар. Ул староста булды. Рәхимде курста бик ярата торғайнылар. Кешелекле, ярҙамсыл ине шул. Әле лә һис кенә үҙгәрмәгән. Шундай уҡ ябай, алсаҡ. Мәктәпкә әллә күпме ярҙамы тейҙе. Уҡытыусылар ҙа, бала-саға ла бик яратып ҡалды үҙен. Ошо хәл сәбәпсе булдымы - Камиланың күңелендә Рәхимгә ҡарата ихтирам тойғоһо көсәйҙе. Дуҫлыҡтары өҙөлмәне. Егет Өфөгә ҡайтып киткәс тә шылтыратып торҙо. Камиланы һәр саҡ үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы.

"Яңы тормош башларға кәрәк", - был фекер ҡапыл килде ҡыҙҙың башына. Хатта үҙе лә аптырап ҡуйҙы. Ғәзинурҙан хәбәр-фәлән булманы. Ысынлап та, үткән менән йәшәү дөрөҫ булмаҫ. Элекке һымаҡ һөйөү булмаҫ инде булыуын, әммә бәхет төшөнсәһен башҡасараҡ аңларға ла ваҡыт еткәндер. Бер-береңде ихтирам итеү, аңлаша белеү бәхет нигеҙен тәшкил итә. Тойғолар ҙа һәлмәкләнә. Ғәзинурға булған хис-тойғолар тоноҡлана төштөмө әллә?

Рәхимдең саҡырыуын тыңлап, Камила ҡышҡы каникулда Өфөгә юлланды. Хәйер, үҙенең йомоштары ла байтаҡ ҡына ине. Шул уҡ кис Рәхим менән театрға барҙылар. Фойела йөрөп әйләнделәр, унан һөйләшә-көлөшә тамаша залына йүнәлделәр. Камила ҡапыл, нимәндер һиҫкәнеп, башын күтәрҙе. Ҡаршы яҡ ишектән Ғәзинур инеп килә ине. Ҡатыны ҡайҙалыр ситкә ҡарап атлай. Ғәзинур менән Камиланың ҡараштары осрашты. Ғәзинурҙың ҡаштары һиҙелер-һиҙелмәҫ өҫкә сөйөлдө. Эргә-тирәләге бар нәмә юҡҡа сыҡты. Донъяла, гүйә, ошо икәү генә тороп ҡалды. Тәү башлап Камила иҫенә килде. Баш ҡаҡты. Ғәзинур яуап бирҙе. Ҡыҙ, ҡарашын көс-хәл менән унан айырып, ситкә боролғандай итте. Рәхимде ҡултыҡлап ары атланы. Ғәзинур баҫҡан килеш тора бирҙе. Камила урынына барып ултырғас, ҡарашы менән йәнә Ғәзинурҙы эҙләне. Ана, башын аҫҡараҡ эйгән килеш алғы рәткә үтте. Ҡатыны ҡулын болғай-болғай ниҙер һөйләй. Ире уны ишетмәй шикелле. Башын бөтөнләй икенсе яҡҡа борған. Бер аҙ ултырғас, артҡа ҡайырылды. Йә Хоҙа, тәнде зымбырлатҡан, эҫеле-һыуыҡлы иткән шул уҡ күҙҙәр! Ошо йылдар бер нәмәне лә үҙгәртмәнеме ни? Камиланы эҙләйме был арбаусан күҙҙәр? Тапмай. Шулай яҡшыраҡ. Шулай яҡшыраҡ... Камила боҫҡандай итте. Юҡ, тапһын ине, күрһен ине уны! Әйтһен ине күҙҙәре менән үҙенең сикһеҙ һөйөүен! Камиланы ғына һөйөүен! Йәнде телгеләгән нәфрәт уты гөлтләп һүнде, юҡҡа сыҡты. Йөрәкте әйтеп аңлатҡыһыҙ шатлыҡ биләне, унан - һағыш...

**(Дауамы. Башы 27-29-сы һандарҙа).**

*✓ Йырҙың йөкмәткеһен, аранжировкаһын, башҡарыуҙы йәш тамашасыларыбыҙ ҙа тыңлағандай стилдә яҙҙыҡ. Ун биш - ун һигеҙ йәштәгеләр ҙә тыңлай, ҡабул итәләр.*



ИЖАДХАНА

# МИҘГЕЛ ЯБЫЛДЫ,

## йәшәһен яңы миҙгел!

**Байлыҡтың төрлөһө була: матдиһы бар, күҙгә күренмәгән рухи байлыҡ та була. Ҡыҙығы шунда: матди байлыҡты үлсәп, хаҡын билдәләп була. Хәлегеҙҙән килһә, рухиәтте үлсәп баһалап ҡарағыҙ. Бәхәсләшмәйем, ике байлыҡ төрөн булдырыуҙа ла ижади эшмәкәрлек кәрәк, әммә сәнғәт өлкәһендә күңел нисбәте күберәк талап ителә... Сибай концерт-театр берекмәһенең үткән миҙгелдәге эшмәкәрлеге һәм киләсәккә пландары тураһында һөйләүен һорап, директорҙың ижад буйынса урынбаҫары Рәмил Париж улы ТУЙСИНға мөрәжәғәт иттек.**



### Төп үҙенсәлегебеҙ

Республикабыҙҙағы дәүләт кимәлендәге дүрт филармонияның (беҙ - концерт-театр берекмәһе) береһе буларак, төп йүнәлешебеҙ, маҡсатыбыҙ, бурысыбыҙ, эшебеҙ - ижад итеү, Сибай ҡалаһының ғына түгел, Урал аръяғының да сәнғәт усағы булыу. Бының өсөн нығыу нигеҙебеҙ бар, сөнки башҡорт халыҡ ижадының 80-90 проценты беҙҙең ерлектә һаҡланған, хатта "Урал батыр" эпосы ла беҙҙең яҡта яҙып алынған. Урал аръяғында, Ирәндек, Һаҡмар буйҙарында йәшәгән халыҡтың рухи мираҫын, фольклорын халыҡтан йыйып алып, кире халыҡҡа еткереү эшен атҡарабыҙ. Беҙҙә әҙерәк дөрөҫ аңламайҙар, тапалған әйберҙәр менән мауығыусандар, тип уйлайҙар. Дөрөҫө - сәхнәнән халыҡҡа еткереү генә түгел, ә халыҡтан алып, юғары сәнғәт әҫәре формаһында кире халыҡҡа еткереү - беҙҙең төп үҙенсәлегебеҙ.

Ойошмабыҙ юридик телдә концерт-театр берекмәһе тип атала. Тыуҡанынсы йылдар башында ҡала филармонияһы буларак асылған ижад усағының бай тарихы бар, ул урындағы халыҡ ижадын үҫтереү маҡсатында барлыҡҡа килгән, башҡорт халыҡ сәнғәтен үҫтереү өсөн асылған. Тимәк, башҡорт халыҡ сәнғәте беҙҙең ҡулда.

### Моңдоң патриоты

Әлбиттә, дәүләт учреждениеһы буларак, юғарынан план төшөрөлә, әммә уны үтәү өсөн арзан сәнғәткә күсеп китмәү ҙә зарур бит әле, шуға алтын урталыҡты табырға тырышыр кәрәк. Ул бар! Бармаҡ күрһәтһәң дә көлә ҡай бер тамашасы, шулай ҡыҙыҡ һымаҡ, әммә был еңел сәнғәт төрө. Шәхсән үҙемдә еремдең, халҡымдың, үҙебеҙҙең моңдоң патриоты тип һанайым. Моңдоң патриоты буламы, тиерһегеҙ? Була! Сөнки моңдоң эсендә тарих, халҡыбыҙҙың яҙмышы ята. Беҙ хөкүмәт планын үтәп киләбеҙ, Аллаһҡа шөкөр, сөнки беҙ профессиональ коллектив, һәүәҫкәр ял үҙәге түгелбеҙ. Алтын урталыҡты табыуҙың үҙ юлдары бар. Мәҫәлән, халыҡ йырҙары яңғыҙ башҡарылырға тейеш, тигән стереотип йәшәп килә. Ә ниңә, алты-ете егет берґәләп, тәндә зымбылатып, халҡыбыҙҙың мәшһүр "Урал"ын йырлаһын әле, насармы? Бер яҡтан - яңылыҡ, икенсе яҡтан - был алым тамашасыны йәлеп итеү сараһының бер төрө булып тора. Әгәр фольклорҙы күтәрәбеҙ, тип кенә сәхнәгә сыҡһаҡ, халыҡты йыйып алыуы ауыр булыр ине, күп тармаҡлы, көтөлмәгән сюрприздарҙы күрһәтә белеүебеҙ тамашасыларҙы йәлеп итә. Шуға күрә сибайҙарҙан яңылыҡ көтөләр һәм концерттарға йөрөйҙәр, беҙ иһә уларҙың ышанысын аҡлап киләбеҙ.

Халыҡ ижады тиһәк, ниңәләр, ололарҙы күҙ алдына килтерәбеҙ, юҡ, төп тамашасыларыбыҙ - урта йәштәгеләр. Беҙ композиторҙарға мохтаж түгелбеҙ, халыҡ ижадына тартым әйберҙәрҙе халыҡ ижады стилендә үҙебеҙ яҙабыҙ, өҫдөрт композиторыбыҙ менән матур программалар сығарабыҙ. Миҫал өсөн "Тултырма" йырын алайыҡ. Халҡыбыҙҙың милли ризығы тураһында булғас, ул халыҡ йырына тартым булырға тейеш, ә беҙ йырҙың йөкмәткеһен, аранжировкаһын, башҡарыуҙы йәш тамашасыларыбыҙ ҙа тыңлағандай стилдә яҙҙыҡ. Ун биш- ун һигеҙ йәштәгеләр ҙә тыңлай, ҡабул итәләр. Миллилекте күрһәтеү фольклор аша ғына атҡарылмай, тарихи ваҡиғаларға бәйләп, милләтебеҙҙең йөҙөн билдәләрҙәй йырҙарҙы ла халыҡҡа еткерәбеҙ. Беҙҙең быуын бала саҡтан ишетеп үҫкән йырҙарҙың береһе - "Өс бажа"ны алайыҡ. Йәшерен-батырыны юҡ, алтмышынсы йылдарҙағы йырҙар халыҡ йырҙарына алыҫлашмаған, улар халыҡ йырҙары һымаҡ камил әҫәрҙәр, шуға күңелдәребеҙгә яҡын. Был йырҙы элеккесә эшләп сәхнәгә сығарһаҡ, үҙебеҙ ҙә шул йылдар стилендә ҡалыр инек, шуға яңы стилгә һалып эшкәртеү шарт.

Ә эшкәртеү нимәнән ғибәрәт? Ул да халыҡ ижадынан алынған әйбер - импровизация! Элек бит сәсәндәр ҙә, ҡурайсылар ҙа оҫта импровизаторҙар булғандар. "Өс бажа"ны эшкәртеп, өс тауышҡа һалып, заманса аранжировка менән өс бажаға хас хәрәкәттәр аша өс образ уйлап сығарғайныҡ, халыҡ йырҙы үҙ итте, сөнки моң халыҡтың ҡанында, элеккесә ҡабатлап бирһәк, бәлки, артыҡ иғтибар итмәҫтәр ине. Йәштәр иһә уны өр-яңы йыр тип ҡабул итә, сөнки улар уның тарихын белмәй, оло быуынға ҡыуаныс, сөнки йыр үҙе камил, авторҙар йыры халыҡ йыры кимәлендә ҡабул ителә. Ретро йырҙарҙы артабан да заманса һулыш биреп сығарыу кәрәк, сөнки унда ысын, дөрөҫ ноталар ята, яһалмалыҡ юҡ.

### Ижад үҙәге

"Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле лә беҙҙең ерлектәге, ошо яҡта сыҡҡан көйҙәргә, уларҙың тарихына таянып, халыҡсан бейеүҙәрҙе башҡара. Уны ойоштороусы Гөлназ Акназарова ансамблде әле лә бағып ҡурсалап, уның йөҙөн һаҡлауға булышлыҡ итә. Бейеүҙәрҙә лә халыҡ ижады, халыҡ сәнғәте, бейеү сәнғәте дауам итә. Музыканттарға килгәндә, ҡурайсыларыбыҙ көслө. Айнур Әминев, мәҫәлән, Октябрьский ҡалаһында ҡурайсылар конкурсында Гран-при эйәһе булды. Ҡурайсы бит ҡурайҙа уйнаусы ғына түгел, ул тарихсы ла, моңсо ла, йыраусы ла. Бәйгенең шарттары буйынса конкурста ҡатнашыусылар йөҙҙән ашыу көйҙө белергә тейеш. Уның белмәгән көйө, легендаһы юҡ, әле лә үҙ өҫтөндә эшләй, ҡайҙандыр ноталарын табып, фольклор сығанаҡтарына таянып, ижадын байыта, уйнаған көйөн йырлай, йырлаған көйөн уйнай белә.

Баянсыларыбыҙ ҙа шәптәр. Дмитрий Шәрәфиев, мәҫәлән, баянсы булып оҙаҡ йылдар эшләй. Ул юғары кимәлле музыкант, репетицияһыҙ ҙа уйнай алыусы баянсы. Музыкаль яҡтан көслө базабыҙ бар. Берекмәбеҙ ҙур бер завод һымаҡ: кемдәндер радионан ишетеп, йәки телевизорҙан күреп, отоп алыу менән мауыҡмайбыҙ, үҙебеҙ ижад итәбеҙ. Көйҙәрҙе Азат Исҡужин йә үҙем сығарам, аранжировканы Ғәйсәр Моратов, Дмитрий Шәрәфиев һәм Радик Далхиндар эшләй һәм йырҙы радио-телевидениеға үҙебеҙҙең студияла яҙабыҙ. Эшлә, йыбанма, ижад ит, бындай мөмкинлек һәр кемгә эләкмәй - берекмәне Ижад үҙәге тип атарға була.

### Театр һәм филармония

"Сулпан" театры республикала бер-ҙән-бер балалар театры. Урал аръяғында ғына түгел, республикала, Рәсәйҙең милләттәштәребеҙ йәшәгән төбәктәрендә балаларҙың театр сәнғәтенә һөйөү ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү - уның төп эшмәкәрлеге. Шундай ойошма менән бер ҡыйыҡ аҫтында булыу берекмәнең эшенә өҫтөнлөктәр бирә. Спектаклдәр, концерттар айырым донъя һымаҡ күренһә лә, кәрәк ваҡытта берләшәбеҙ, театр, бейеү, инструменталь-музыка сәнғәте булһынмы - барыбыҙ ҙа дөйөм эште алып барабыҙ. Әлегә бер ҡыйыҡ аҫтында тәүге миҙгелебеҙҙе үткәрҙек: спектаклдәргә беҙҙең артистар, концерттарға драма артистары ҡушыла. Яңы миҙгелде асыуҙа ике коллектив бергә сығыш яһаясаҡ һәм киләсәктә шулай дауам итәсәк. Быны яңылыҡ тип ҡабул итергә лә ярамай, элек мөмкинлектәр генә булмайыраҡ торҙо.

### Яңы бинаға - яңы йөкмәтке

Яңы бинаға күсеүҙең үҙенә күрә бер әтнәкәһе бар: эшебеҙҙең яңы йортобоҙға торошло йөкмәткеһе булырға тейеш, ошо матур зданиеның ҡиәфәтенә торорлоҡ тамашалар эшләү, ижадты ошо кимәлгә күтәреү зарур. Заманса мөмкинлектәребеҙ етерлек: әйләнеп торған сәхнә, ҙур майҙанлы яҡты-диодлы экран, биш йөҙгә яҡын тамашасылар һыйҙырышлы зал, яҡшы акустика, яҡтыртыу ҡоролмалары, дизайн һәм башҡа заманса технологиялары. Маҡсатыбыҙ - заманса ҡоролмаларҙы дөрөҫ ҡулланып, шуға ярашлы матур йөкмәткеле тамашалар сығарыу. Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар, тигәндәй, халыҡ залды ҡарар өсөн дә килә. Матур залда насар тамаша ҡараһа, йәмһеҙ булыр ине, бөтәһе лә лайыҡлы кимәлдә булырға тейеш. Урал аръяғы сәнғәтен Рәсәй, донъя кимәленә сығара алғандай коллектив тупланған беҙҙә. Матди-техник базабыҙ нығыу, транспорт мәсьәләһендә лә проблемалар юҡ. Әле һабантуйҙар мәлендә Ханты-Манси округы, Сорғот, Пермь ҡалалары, Свердловск өлкәһенең байрамдарында эшләнек. Юғары кимәлдәге һабантуйҙарҙа һыр бирмәй матур сығыштар яһайбыҙ икән, тимәк, Рәсәй кимәлендә республикабыҙҙың, милләтебеҙҙең данын, йөҙөн күрһәтерлек ҡеүәтебеҙ бар. Мәҙәниәт министрлығы ҡайҙа башҡорт рухлы сығыштар кәрәк, иң тәүҙә сибайҙарҙы күҙ уңында тота. Был ҙур баһа!

### "Майҙан" Сибайҙан

Һынылыш осоро һәр ойошмала була торған хәл, беҙҙә лә булманы түгел, булды, әммә ауыр мәлдәрҙе лайыҡлы сығыу ғына түгел, беҙ хатта яңы берәмектәр булдырырға өлгәштек. Мәҫәлән, Брасс-квинтетын алайыҡ. Башҡорт көйҙәрен рус классик көйҙәре менән берлектә уйнау кимәленә етә алды егеттәр, үҙебеҙҙең йырҙарыбыҙға квинтет өсөн эшкәртеүҙе Радик Далхин эшләне. "Ҡара юрға"ны брасс-квинтеты менән йырлауҫылыр бармы? Беҙҙә бар! Тағы ҡыуанyслы ваҡиға: өр-яңы структура төҙөлдө, Радик Далхин етәкселегендә "Майҙан" этно-рок төркөмө тәүге емештәрен тыңлаусыларға еткерҙе. Азат Исҡужин, Айнур Әминев, Радмир Иҫәнғолов, Сергей Филиппов, Флорид Бирғәлиндарҙан тупланған был төркөм маҡсатлы, киләсәкле, өмөтлө һәм ойошмабыҙға хас профессиональ музыканттарҙы берләштерә. Йыр сәнғәтендә әле ишетелмәгән йырҙарҙы сығарыу - уларҙың төп маҡсаты. Үҙҙәре йырҙар яҙалар, аранжировка эшләйҙәр, үҙҙәре башҡаралар, кемдәндер әйрәнеп, сәлдереп түгел - профессионаллектең иң тәүге сифаты шул булырға тейеш, сөнки плагиат булғанда профессионаллек булмай. Шулай ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, артыуға өлгәштек, тимәк, яңылыҡҡа ынтылыу маҡсатыбыҙ тормошҡа аша.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яңғыҙ кешенең ижады булһынмы, күмәк кешенең берҙәм ижады булһынмы, асылы шул килеш ҡала: яңылыҡ бөркөләп торһон да, адресатын тетрәндерһен, уйландырһын, хис-тойғолар аша аңға барып етһен, шуныһы ул кемделер ҡабатлау кеүек ҡабул ителә һәм тиҙ онотола. Әле һөйләшеү коллектив ижад тураһында барҙы, тойғоға биреләп, фекер туплямайса, ҡул болғарға ашыҡмағыҙ, зинһар.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

✓ *Ул саҡта "милли кейем" тигәндә башлыса сәхнә кейемдәре күҙҙә тотола ине. Сәхнә өсөн милли кейем тегеүселәр араһында этнографик материалдарға таянып эшләүселәр һирәк күренеш булды.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОГУРТ АША!

■ АҠШ-тың Миннесота университеты ғалимдары көн һайын йогурт ашау ҡан баҫымы күтәрелеү сирен булдырмаҫҡа ярҙам итә, тип билдәләй. Йогурт составындағы кальций ҡан тамырҙарының һығылмалылығын һаҡларға ярҙам итә. Британияның диетологтар ассоциацияһы ағзаһы Рик Миллер аныҡлап китеүенсә, кальций ҡан тамырҙары һәм мускул системаһын нормала тоторға ярҙам итә. Быны тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Көнөнә 120 грамм йогурт ашаған кешеләрҙә был сирҙәр барлыҡҡа килеү хәүефе 31 процентҡа түбәнәйгән. Әммә белгестәр иҫкәртеүенсә, аҙыҡ өҫтәмәһе булараҡ тәҡдим ителгән кальций кире тәьҫир итә - артерияларҙың стенаһы ҡалыная.

■ Гарвард университеты тикшеренеүселәре белдереүенсә, етәкселәр ябай хеҙмәткәрҙәргә ҡарағанда стресҡа бигүк бирешеп бармай. Быны ҡан составын кортизол - стресс гормонына тикшергән тест күрһәткән, сөнки был гормон кеше көсөргәнеш кисергәндә бүленеп сыға. Етәкселәрҙә кортизол унның ҡул аҫтында эшләүселәрҙекенә ҡарағанда 27 процентҡа түбәнерәк булып сыҡҡан. Ғалимдар быны етәкселәрҙең барыһын да контролдә тотоуы, ә ябай эшселәрҙең юғары торғандарҙың ихтыярына буйһонорға мәжбүр булыуы менән аңлата. Шулай итеп, белгестәр быға тиклем киң билдәле фекерҙе - ябай вазифала эшләүгә ҡарағанда, етәксе булып эшләүҙең нервыларҙы күпкә нығыраҡ ҡаҡшатыуын кире ҡаға.

■ Швецияның Каролина университеты ғалимдары яһаған һығымта буйынса, ҡатын-ҡыҙҙар ни тиклем антиоксиданттарҙы күберәк ҡабул итә, шул тиклем уларҙың йөрәге инфаркт хәүефенән һаҡлана. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 49 йәштән 83 йәшкә тиклемге 32 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Белгестәр уларҙың һуңғы ун йыл эсендә нимә ашарға ғәҙәтләнеүе менән ҡыҙыҡһынған. Ошо ун йылда антиоксиданттарға бай ризыҡтар менән туҡланыусылар араһында йөрәк сирҙәренә 20 процентҡа һирәгерәк бирешкән. Шулай уҡ емеш-еләк һәм йәшелсә ашарға яратыусылар иң сәләмәт булып сыҡҡан. Диетологтар ҡара емеш, һырғанаҡ, көртмәле, виноград, мүк еләге, ҡарағат, анар, кишер, помидор, кәбеҫтә, ҡабаҡ антиоксиданттарға бай икәнен иҫегеҙгә төшөрә. Шулай уҡ был исемлеккә йәшел сәй менән какао ла инә.

■ Гүзәл заттарға бәйле тағы ла бер мәғлүмәт. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, теп-теүәл 17 йыл - уртаса бар ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тап ошо тиклем ваҡытты диетала ултырыуға сарыф итә. Бөйөк Британия диетологы Кевин Доррен, һәр хәлдә, шулай тип раҫлай. Ул үҙенең иләндә ҡатын-ҡыҙҙар араһында һорау алыуҙар үткәргән һәм уларҙың 90 проценты ҡасан да булһа диетала ултырыуын асыҡлаған. Бынан тыш, яуап биреүселәрҙең күпселеге диетаға һәр ярты йыл һайын ултыра, ә диетала ултырыу ваҡыты яҡынса ете аҙнаға һуҙыла икән. Яҙын диетала ултырыусыларҙың һаны тағы ла арта, сөнки һәр гүзәл зат үҙен йәй миҙгеленә әҙерләй башлай. Тыуған көн, туй алдынан да ябығырға тырышыусылар күп кенә. Бына ошоларҙың барыһын да бергә ҡушһаң, тап 17 йыл ваҡыт килеп сыға, ти белгес.

■ Лондондағы Империя колледжы хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, шоколадта йүткереүҙе баҫыу һәләтенә эйә булған матдә - теобромин барлығы асыҡланған. Шуға ла һыуыҡ тейгәндә шоколад ашау файҙалы. Татлы аҙыҡтың ыңғай яғы был ғына түгел. Шоколад тирене ҡояш нурҙарынан һаҡлай һәм йөрәк, ҡан-тамырҙары торошон яҡшырта.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЫНА ОШО ФИҘАҠӘРҘӘР...

## башҡорт рухына ҡанат ҡуя

**Ошо көндәрҙә Учалы районы Баҡшай яланында үткән күп төрлө программалы "Ай, Уралым, Уралым" фестивалендә тамаша ҡылыусылар хөкөмөнә "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының да "Хаталар өҫтөндә эш" тип аталған бер проекты тәҡдим ителде.**

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда башҡорт милли кейеменә ҡыҙыҡһыныу арта, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙенең көндәлек тормошонда һаҡал, селтәр, яға, алмиҙеү, хәситә кеүек башҡорт биҙәүестәренә өҫтөнлөк бирә икәнен беләһегеҙҙер. Ысынында, әүҙем ҡыҙыҡһыныу барыбер ҙә "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ойошторолған мәлдән барлыҡҡа килде, тип һис икеләнмәй әйтеп була, сөнки ойошма ағзалары үҙ эшмәкәрлеген башҡорт милли кейемен тергеҙеүҙән башланы һәм был ҡыҙыҡһыныуҙы башҡа ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ла "йоҡторҙо". Ул саҡта әле "милли кейем" тигәндә башлыса сәхнә кейемдәре күҙҙә тотола һәм улар бер төрлөлөктән азат түгел ине. Сәхнә өсөн милли кейем тегеүселәр араһында этнографик материалдарға, Шитова, Камалиева, Руденко хеҙмәттәрендәге өлгөләргә таянып эшләүселәр һирәк күренеш булды. Бына шуға ла "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары тап ошо авторҙар китаптарындағы, шулай уҡ музейҙарҙағы һәр ырыуға хас булған кейем, биҙәүестәр өлгөләренең төп нөсхәһен төбөнә төшөп өйрәнеп, уларҙы тергеҙеү буйынса эш башланы. "Хаталар өҫтөндә эш" тип аталды ла инде был дөйөм эшмәкәрлек төрө. Хатта республика Башлығы грантына ла тәҡдим ителгәйне был проект, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай инициативаның әһәмиәтен аңлаусылар булмай сыҡты был грантты бүлеү комиссияһында...

Әйткәндәй, тап шул осорҙа "Мәргән уҡсы" ойошмаһын бар итеүселәр ҙә ошондай уҡ талап ҡуйҙы үҙ ағзалары алдына, йәғни улар бәйге майҙанына боронғо башҡорт милли кейемендә сығырға тейеш булды. Шулай башланды һәм дауам итә матур традициябыҙҙы, тарихи хәтерҙе тергеҙеү. Бына нисек һүрәтләй ойошманың ошо фиҙаҡәрлеген Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева: "Сәхнә кейеменән айырылып торған, һәр элементына башҡорттоң аҡылы, фәлсәфәһе, зауҡы һалынған бай, затлы кейемде тергеҙәбеҙ беҙ хәҙер. Яғабыҙ үҙе генә ни тора! Республикала "селтәр" һүҙе менән генә таралып китә яҙған был биҙәүесебеҙ әкренләп һәр төбәктә үҙ атамаһы менән атала башланы. Тел байлығын да һаҡлап ҡалдыҡ. Сигеүле алъяпҡыс, күлдәктәр тергеҙелде. Учалы яғы күлдәктәре бер нисә итәкле булып, элмәле сигеү һалғанда, биҙәк эсе тултырып сигелмәй икәнен белдек. Тәбиғи туҡымаға ошондай сигеү һалып тегелгән күлдәкле ағинәйҙәр - үҙе бер йәм. Флүр яулыҡ, ҡушъяулыҡ ябынабыҙ хәҙер. Яулыҡ флүр йә ҡуш булһын өсөн дә үҙ сере бар уның: таҫмаһын дөрөҫ баҫырға, инесен һалырға, эйәк бауын да шартына килтереп бәйләргә кәрәк. Кейемгә, унның эшләнеү алымдарын өйрәнеүгә баш көллө сумдыҡ тип әйтә алабыҙ. Аяҡ кейемебеҙ - сарыҡ, ҡатаны эшләргә лә йәһәт кенә өйрәнә һалдыҡ. Шартына килтереп, тулаһын һуғып, уны баҫып алғас, үксә бороу эшенә тотонаһың. Ҡысмауын ишеп, бер-нисә төҫтән суғын ҡуйып ебәрһәң, күнгә ултыртылған был аяҡ кейеме ифрат шәп килеп сыға. Ваҡытыңды йәлләмәй, күҙ нуры түгелгән, байтаҡ ҡына сығым талап иткән бындай кейем балаларыбыҙға иҫ киткес бай ҡомартҡы буласаҡ. Эш барышында халҡыбыҙҙың шул тиклем матурлыҡты, нәфислекте яратыуын, һәр нәмәне күңел һалып башҡарыуын төшөнөү ҙә ҙур кинәнес. Ә күпме тел байлығы ҡайтанан телмәргә күсте!"

"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының бына ошо эшмәкәрлеге һөҙөмтәһенә бер аҙ ғына байҡау яһалды әлеге Баҡшай яланында үткәрелгән матур сарала. Учалы, Баймаҡ, Белорет, Ишембай, Мәсетле, Йылайыр, Күгәрсен райондарының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары үҙҙәренең табын, бөрйән, ҡатай, юрматы, дыуан, түңгәүер, ҡыпсаҡ ырыуҙары ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейем һәм биҙәүестәр өлгөләрен алып сыҡты сәхнәгә. Һәр район делегацияһы уларҙы ниндәй этнографик сығанаҡтан, ниндәй автор китабынан, ниндәй музейҙан өйрәнеп тегеүен, хатта ырыу кейемдәренә бәйле йыр-риүәйәттәрен, таҡмаҡтарын да ҡушып, сығыш яһаны. Башҡорт милли кейеме буйынса белгес, филология фәндәре кандидаты Азат Ғарипов уларҙың эшенә баһа биреп, шулай тине:

- Тәүҙән үк үҙебеҙҙең ерлектәге аутентик башҡорт милли кейемен тергеҙеүгә Учалы ағинәйҙәре менән бергә тотондоҡ, яға, сарыҡ-ҡата, ке-




*Учалы ағинәйҙәре.*



*Фестивалдә ҡатнашыусы 7 район ағинәйҙәре.*

йемдәр буйынса әллә күпме оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде. Баймаҡ һәм башҡа районда ағинәйҙәре менән дә ошо юҫыҡта онлайн-дәрестәр ойоштороҙоҡ. Ғөмүмән, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының әләсәйҙәребеҙҙең милли кейемен һәм биҙәүестәрен тергеҙеү буйынса ошо эште бик яуаплы, системалы алып барыуы ҡыуандыра мине. Ә бит был еңел эш түгел. Милли кейемде тергеҙгәндә дөрөҫ эшләү өсөн дөрөҫ мәғлүмәт, дөрөҫ сығанаҡтар талап ителә. Ваҡыт үткән һайын, үкенескә, ауылдарҙа тотоп ҡарап эшләргә өйрәнерлек боронғо әйберҙәр кәмей бара, киләсәктә уларҙың бөтөнләй юҡҡа сығыуы ихтимал. Шуға ла мин үҙебеҙҙең Учалы районында иллегә яҡын боронғо яғаны табып, улар тураһында мәғлүмәтте китап итеп баҫтырып сығарҙым. Ошондай эш һәр районда атҡарылһын ине, тип теләйем. Ҡомартҡыларҙы эҙләп табып, мөмкин тиклем ентекле өйрәнеп, китап итеп баҫтырып сығарыуҙы дауам итергә кәрәк. Быны беҙ үҙебеҙ эшләмәһәк, башҡалар эләктереп алырға, беҙҙең ҡомартҡыларҙы үҙенеке итеп үҙләштерергә әҙер торалар икәне лә сер түгел. Бөгөн сәхнәгә сыҡҡан ағинәйҙәрҙең кейеменә ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел ине: белгес булмаһалар ҙа, улар үҙ ырыуының кейемендәге үҙенсәлектәрҙе, айырмаларҙы күрә, таный һәм дөрөҫ тотоп ала белгән. Халҡыбыҙҙың бай тарихы кейемдәрҙә, биҙәүестәрҙә лә сағылыш таба икәненә шаһит булдыҡ уларға ҡарап. Милли кейемде тергеҙеүгә үҙ өлөшөн индергән ағинәйҙәргә ҙур рәхмәт! Эшләйһе эштәр күп әле!

Эйе, эшләйһеләр күп. Милли башҡорт кейемен төп нөсхәләренә яраштырып тергеҙеү һәр районда "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары алдына ҡуйылған бик күп бурыстарҙың береһе. Был юлы ете ырыу вәкиле генә сәхнәгә күтәрелһә, киләсәктә беҙ бар ырыу вәкилдәренең дә дәррәү сығыштарын күрербеҙ әле, тип өмөтләнәйек. Ә бына башҡорт ир-егеттәренең камил, теүәл боронғо милли кейемендәге уҡсылар ошондай һәр фестивалдә мәргәнлектәрен генә түгел, ә иң энтузиаст, иң әүҙем, иң ойошҡан, иң яуаплы ойошма икәнен дә раҫлай килә һәм был ҡыҙыҡһыныуҙы шулай уҡ башҡа ир-егеттәргә лә, хатта ҡатын-ҡыҙҙарға ла "йоҡтора". Улар сафы ишәйә бара. Мәргән уҡсылар бигерәк тә пандемиянан һуң аҙна һайын тиерлек бәйгеләр ойошторорлоҡ әүҙемлек күрһәтә.

Бик күп ҡатнашыусыларҙы һәм тамашасыны йыйған Баҡшай ерендәге бәйге ысынлап та бик уникаль һәм ул был юлы 4-се тапҡыр үткәрелде. Мәргәндәр өс көн буйы төрлө аралыҡта алышты. Көсөргәнешле бәйге тотоусылар араһынан "Баҡшай мәргәне" номинацияһында еңеүгә Сибайҙан Хөрмәт Таһиров, Баймаҡ районынан Айнур Йәрмөхәмәтов менән Ғәфүр Рахманғолов, ҡатын-ҡыҙҙар араһынан Учалы районынан Лиана Ихсанова, Бөрйән районынан Әлиә Ишморатова, Учалынан Динә Вәлиева лайыҡ булды. "Ырыуҙар ярышы"нда 1-се урынды - Баймаҡ районының бөрйән ырыуы, 2-сене - Бөрйән районынан бөрйән ырыуы, 3-сөнө Учалы районының тиләү-табын ырыуы яуланы. Шулай уҡ "Ғаилә ярышы", "Азиянан - Европаға" (Яйыҡ йылғаһы аша атыу) ярыштарында көс һынашыу турнирҙың сағыу бер күренеше булараҡ баһаланды. Республикала утыҙҙан ашыу ғаилә уҡ атыу менән шөғөлләнһә, был юлы "Ғаилә ярышы"на 14 ғаилә сыҡты. Улар араһынан Лиана менән Руслан Әхмәҙиевтар (Учалы районы), Әлиә менән Илдар Ишморатовтар (Бөрйән районы), Лилиә менән Рәис Низаметдиновтар (Өфө ҡалаһы) еңеү яуланы. "Азиянан - Европаға" номинацияһында ир-егеттәрҙән Таһир Абдрафиҡов (Силәбе өлкәһе), Тимур Өмөтбаев (Баймаҡ районы), Илназ Үҙәнбаев (Учалы районы), ә ҡатын-ҡыҙҙарҙан 13 йәшлек Карина Дәүләтова (Ишембай районы), Сәлимә Рахманғолова (Баймаҡ районы) һәм Мира Кәримова (Ишембай ҡалаһы) иң оло баһаға лайыҡ булды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ошондай халыҡсан һәр йыйын, һәр сара рухлы, сая, ныҡышмал, тарихи хәтергә таянып эш иткән энтузиаст ойоштороусыларҙың хеҙмәт емеше булараҡ ҡабул ителә. Был юлы беҙ шундай энтузиастарҙың береһе - фестивалдең авторы һәм ойоштороусыһы Рәис Жәүҙәт улы Низаметдиновты һәм уның командаһын маҡтап телгә алабыҙ. Тап уларҙың теләге һәм тәҡдиме буйынса ете райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары Баҡшай яланына йәм биреп, фестивалгә килеүсе тамашасының күҙенә ысын матурлыҡ өлгөһө булып салынып, сәхнәлә үҙ ижади эшмәкәрлеге менән таныштырып, мәргән уҡсыларҙы ла күтәрмәләп ҡатнашлыҡ итте. Ағинәйҙәр шулай уҡ үҙҙәрен тирмә ҡороп, аш табыны әҙерләп ҡаршылаған Учалы районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Ҡадиров Мозафар Харис улына мең рәхмәтен еткерҙе. Әлбиттә, ошо коллективтарҙы күтәрмәләп тороусы Учалы районы хакимиәтенә һәм ауыл биләмәләре етәкселәренә лә хуплау һүҙҙәре генә әйтке килә. Ысынында, ағинәйҙәр ҙә, мәргән уҡсылар ҙа үҙ инициативаһы, үҙенең йөрәк ҡушыуы буйынса ана шул етәкселәр ҡулы етмәгәндә тормошҡа аткара һәм халыҡты рухлы, айыҡ, халыҡсан сараларға йәлеп итеп, ысын тәрбиә мәктәбе һабаҡтары бирә бит. Шуны аңлаған, таныған етәкселәр, әлбиттә, хуплауға, маҡтауға, рәхмәт һүҙҙәренә лайыҡ.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**


*Ишембайҙан 13 йәшлек К. Дәүләтова тренеры З. Сәфәрғолова менән.*


*Бәйге тотоусы ғаиләләр.*



*Мәргәндәр.*

## УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Аң һәм тән бәйләнеше

Аңдың тән күҙәнәктәренә йоғонтоһо тиҫтәләрсә йылдар ныҡлы өйрәнелде, әммә был бәйләнеште микроскоп ярҙамында асыҡлап булмай. Бәлки, киләсәктә быға телескоп ярҙам итер, сөнки Клив Бакстер был "беренсел ҡабул итеү" химик реакциялар йәки нервылар импульстарына нигеҙләнмәгән, ә Йыһан тәбиғәтенә һалынған, тип раҫлай. Быңдай ҡараш яңы түгел.

Бынан йөҙҙәрсә йылдар элек Австралия актеры Маттиас Александр үҙенең һөйәктәре менән уйында ғына һөйләшеп, сәхнә теле проблемаларынан ҡотола. Ул: "Муйыным еңел борола, башым өҫкә лә аҫҡа ла йөрөй, арҡам турая һәм борола", - тип ҡабатлай. Шунан башлап Александр ысулын ҡулланып, донъяның төрлө мөйөштәрендәге күп уҡытыусылар сәләмәтлегендәге "дауалап булмаған" кешеләргә ярҙам итә.

Был ысул гипноз, үҙ-үҙеңде ышандырыу һәм Фелденкрайс, Симонтон, Сильва кеүек аң менән тән араһындағы бәйләнеште камиллаштырыу менән шөғөлләнгән сағыу шәхестәр аша киң таныулау тапты. Мойше Фелденкрайс был өлкәгә "Хәрәкәт аша аңлау" эше менән өлөш индерә. Был хеҙмәттә психик һәм физик процестар берләштерелә. Карл Симонтон яман шеш ауырыуҙарын хатта "дауалап булмаған" осраҡтарҙа ла ремиссия мәсьәләләрендә ысын квант һикереүе яһай: ул ауырыуҙарға көсөргәнештән арынырға ла ҡан күҙәнәктәренең яман шеш менән көрәштә еңеп сығыуын күҙалларға тәҡдим иткән. Фәндә уның методикаһы "психонейроиммунология" атамаһын ала. Хосе Сильва хәҙер "Сильва ысулы" тип аталған һәм идара итеү ысулын эшләй. Ул төрлө илдәрҙәге миллионлаған кешене насар ғәҙәттәрҙән арыныу, тәндең ағзалары һәм системалары эшен нормалләштереү, ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү менән бихисап мөғжизәле һәләттәр алыуға килтергән көсөргәнештән арынған альфа-торошҡа инергә өйрәтә.

Бөгөн "психонейроиммунология" атамаһы "киберфизиология" термины менән алмашынды, сөнки дауалау тураһындағы фән аң һәм тәндең үҙ-ара бәйләнешен аңланы, атап әйткәндә, уның иммун системаһы менән генә сикләнмәүен, ә организмдың һәр күҙәнәгенә таралыуын асыҡланы. Бөтөн күҙәнәктәр, туҡымалар һәм ағзалар аңдың бойороҡтарын "ишетә".

Был йүнәлештең һөҙөмтәләрен йомғаҡлап, киберфизиологияның мөһим мәлдәрен тәҡдим итәм. Көсөргәнештән арыныу ғәҙәттәгесә башҡарыла. Уйығыҙҙа ғына тәнегеҙҙең һеҙҙе борсоған урынын күҙ алдына килтерегеҙ. Уның менән матур итеп һөйләшегеҙ, уның "төҙәлеүен" һорағыҙ. Уның нисек яуап "биреүен" тыңлағыҙ. Һуңынан был участканы сәләмәт тип күҙ алдына килтерегеҙ. Уңышығыҙға ярҙам итәсәк бер нисә кәңәш:

- артыҡ уйламағыҙ - эшләгеҙ һәм һөҙөмтә көтөгөҙ;
- күҙәнәктәрегеҙгә ҡәтғи бойороҡтар бирмәгеҙ, дошмандарса мөнәсәбәттәрҙән ҡасығыҙ, улар бит беҙҙең дуҫтар;
- "сығышығыҙҙы" алдан әҙерләмәгеҙ - һүҙҙәр ирҡә һәм ихлас булһын;
- мотлаҡ көсөргәнештән арынығыҙ, кәрәк икән, кирегә һанау ысулын ҡулланығыҙ;
- уйығыҙҙағы картиналарҙы файҙаланығыҙ: уны нисегерәк күҙ алдына килтереү мөһим түгел, аң "кем" тураһында һүҙ барғанын үҙе аңлар.

Һеҙҙең табибығыҙ киберфизиология менән таныш булмауы ла ихтимал. Әммә аң һәм тән һеҙҙеке һәм уларҙы дауланыуға ғына түгел, профилактикаға ла йүнәлтеп була. Киберфизиология медицина дауаһын алыштырмай, әммә уға ярҙам итә.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**



**1 АВГУСТА
ПОНЕДЕЛЬНИ
РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 1.55 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 История одного села. [12+]
17.45 "Орнамент". [6+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Кӱстәнәс. [12+]
19.30 Автограф. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Елкән". [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Тайм-аут. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Музыка крыш". [16+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Последнее море Чингисхана". [12+]
3.30 Кӱстәнәс. [12+]
4.00 Тайм-аут. [12+]
4.30 История одного села. [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).**

**2 АВГУСТА
ВТОРНИК
РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 1.55 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Колесо времени. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Уроки мужества. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Это моя профессия". [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Я украду тебя у всего мира". [16+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Зятек". [12+]
4.00 Х/ф "Я украду тебя у всего мира". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).**

**3 АВГУСТА
СРЕДА
РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 1.55 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 Тайм-аут. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Байык" представляет... [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Каникулы президента". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Тамарис". [12+]
3.45 Автограф. [12+]
4.15 Башкорттар. [6+]
4.45 Әлләсе. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]
5.41 Утро России.**

**4 АВГУСТА
ЧЕТВЕРГ
РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 1.55 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Это моя профессия". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "МузКәрәҙ". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Ап-асыҡ. [12+]
19.30 Автограф. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Сокровища Ермака". [6+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Бесталанная". [12+]
3.45 Х/ф "Сокровища Ермака". [12+]
5.15 История одного села. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).
6.10 Утро России.**

**5 АВГУСТА
ПЯТНИЦА
РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Х/ф "Салют-7". [12+]
23.30 Х/ф "Кандагар". [16+]
1.25 Х/ф "Воин". [12+]
2.55 Х/ф "Молчун". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән ғүмер. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "Юные Пифагоры". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Башҡорт йыры". [12+]
19.45 Специальный репортаж.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Йома". [0+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Веселые гастроли на Черном море". [12+]
0.45 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]
3.15 "Бай". [12+]
3.45 Үткән ғүмер. [12+]
4.15 Автограф. [12+]
4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).**

**6 АВГУСТА
СУББОТА
РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Я все помню". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Второй шанс". [12+]
0.50 Х/ф "Лучший друг семьи". [16+]
4.00 Х/ф "Поздняя любовь". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [6+]
11.15 "Страна поющих цветов". [0+]
11.30 Нык бул. [6+]
12.00 Кӱстәнәс. [12+]
12.30 Бәхетнамә. [12+]
13.00 Үткән ғүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Башкирские народные песни. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Д/ф "Курай Юмабая". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Х/ф "Пятница". [16+]
1.00 Новости недели (на баш. яз).
1.45 Спектакль "Наследство". [12+]
3.15 Үткән ғүмер. [12+]
3.45 Х/ф "Пятница". [16+]
5.15 История одного села. [12+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).**

**7 АВГУСТА
ВОСКРЕСЕНЬЕ
РОССИЯ 1**

5.35, 2.35 Х/ф "Полынь - трава окаянная". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Я все помню". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Х/ф "Допустимые жертвы". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
14.45 Үткән ғүмер. [12+]
15.15 "Дорога к храму". [0+]
15.45 Историческая среда. [12+]
16.15 Концерт Розы Аккучуковой. [12+]
18.30 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]
20.15 Әлләсе. [12+]
21.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Х/ф "Мафия: Игра на выживание". [16+]
0.45 Спектакль "Семейный портрет с посторонним". [12+]
2.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
3.00 Х/ф "Мафия: Игра на выживание". [16+]
4.30 Историческая среда. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Июль айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Учалы районы** Миндәк ауылынан Тайфурова Флүрә, **Көйөргәҙе районы** Яҡшымбәт ауылынан Зиннәтулла Аллағыуатов, Әлмира Аллағыуатова, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Айгөл Ғаймадлисламова, Гөлназ Ҡустыбаева, Гөлзиә Йәмилева, Рәйлә Ишкилдина, Разия Хоҙайғолова, Әнисә Байымова, **Өфө ҡалаһынан** Миңһылыу Абдуллина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ғүмер байрамығыҙ менән тәбрикләп, һеҙгә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, һәр атҡан таңды бәхет-шатлыҡтарға сорналып ҡаршыларға, яҡындарығыҙҙың ярҙамын, игелеген тойоп йәшәргә, рух күтәренкелеге теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Август (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (3) дүшәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 18:45 | 21:15 | 22:45 |
| 2 (4) шишәмбе | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 18:43 | 21:13 | 22:43 |
| 3 (5) шаршамбы | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 18:42 | 21:12 | 22:42 |
| 4 (6) кесе йома | 4:02 | 5:32 | 13:30 | 18:41 | 21:10 | 22:40 |
| 5 (7) йома | 4:04 | 5:34 | 13:30 | 18:40 | 21:08 | 22:38 |
| 6 (8) шәмбе | 4:06 | 5:36 | 13:30 | 18:38 | 21:06 | 22:36 |
| 7 (9) йәкшәмбе | 4:08 | 5:38 | 13:30 | 18:37 | 21:04 | 22:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Яллы арпа тимер юлы буйлап тарала, шунан һуң ғына тораҡ пунктҡа эләгә. Баймаҡта ысын афәт, ул бөтә урамға тулған. Сибайҙа аҙыраҡ. Башҡортостандың бөтөн төбәктәрендә лә бар, шулай ҙа иң күбе - Баймаҡта.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 30 ИЮЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ДУҪЛЫҠ КӨНӨ




**28-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Балта. Әхтәмов. Аттестат. Мәжлес. Ыҙа. Мәрт. Әрҙәнә. Урам. Йыуаса. Уҡ. Бром. Айыт. Бала. Дошман. Милли. Реле. Киев. Актив. Елем. Әйле.

**Вертикаль буйынса:** Салйоғот. Аҫылғужин. Аласабыр. Әҫпе. Емерек. Сама. Артист. Амеба. Уҡа. Кәмә. Татар. Лифт. Анонс. Ел. Мөхәмәтдинова. Бишек. Ләлә. Сөләймәнов.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

## С ВИТАМИНЫ

Белгестәр коронавирустан үлем ихтималлығын кәметеүсе витамин барлығы хаҡында хәбәр итә. "Рәсәй яңылыҡтары" мәғлүмәт агентлығына һылтанып, белгестәр был файҙалы элементтың лимон менән әфлисунда булыуын әйтә.

Тимәк, С витамины вирус менән сирләүҙе еңелләштерә. Эксперттарҙың халыҡ-ара төркөмө күп һанлы тикшеренеүҙәрҙән һуң шундай һығымтаға килгән. Эксперттар пациенттарҙың анализдарын өйрәнеп, коронавирустың ауыр төрө менән сирләүселәрҙең организмында С витамины етешмәүен асыҡлаған. Был витаминды даими ҡулланыу үлем осрағын 68 процентҡа сикләй, ти улар. Әгәр коронавирус менән сирләүсе ошо хәлендә көн һайын 24 грамм витамин ашаһа, ИВЛ аппаратына ятыу көндәре күпкә кәмейәсәк. Профессор Пол Марик был мәғлүмәтте гәмәлдә тикшереп ҡараған. С витаминын ул ауырыуға антикоагулянт һәм стероидтар менән бергә биргән. Был тәжрибә үлем осрағын 5 процентҡа кәметкән. Тикшеренеүҙәр авторы Анита Карр әйтеүенсә, ауыр инфекция менән сирләүсе кешенең организмы иммунитет системаһын тейешле кимәлдә тотоу өсөн С витаминын тиҙерәк ҡулланырға тейеш.

## ГЕРПЕСМЫ?

Иллинойс университеты ғалимдары организмды тулыһынса герпестан таҙартыусы препарат тапҡан.

Был сир кешелекте күптән яфалай. Тәү ҡарашҡа зыянһыҙ ғына тойолһа ла, ул ҙур ҡатмарлыҡтар килтереп тыуҙырыуы ихтимал. Фенилбутират аппаратын ацикловир менән тоташтырып, ғалимдар был берләшмәнең яңы үҙенсәлектәрен килтереп тыуҙырған. Һөҙөмтә хатта тәжрибәле белгестәрҙе лә аптыраштa ҡалдырған. Яңы аппарат ҡыҫҡа ваҡыт эсендә герпесты бөтөнләй юҡҡа сығарған. Тикшеренеүҙәр кеше күҙәнәктәрендә һәм кимереүселәрҙә һынап ҡаралған. Шулай итеп, герпес вирусына бәйле проблема тиҙҙән мәңгелеккә хәл ителәсәк, ти белгестәр.

ТАҒЫ БЕР ХӘҮЕФ

# ЯЛЛЫ АРПА ҺӨЖҮМЕ



**Баймаҡ районында ҡылғанға оҡшаған хәүефле сүп үләне таралған. Был хаҡта беренсе булып урындағы халыҡ борсолоу белдергән. "Уны Баймаҡ районындағы Түбә руднигы карьеры ярын нығытыу өсөн Ҡаҙағстандан килтергәндәр. Ул хәҙер район буйлап тарала бара, - ти район халҡы. - Әгәр ҙә баҫыуҙарға ла барып етһә, бөлә буласаҡ. Уның аҫтындағы ер бетон һымаҡ ҡата. Был үләнде мал ашамай". Был ниндәй үҫемлек? Сүп үләне тураһында тулы мәғлүмәтте һәм уның ысын атамаһын Башҡортостан ғалимдары бирҙе.**

- Ул - яллы арпа (ячмень гривастый) - хәүефле сүп үләне, - тип аңлатты Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты өлкән фәнни хеҙмәткәре, биология фәндәре кандидаты Гөлназ Хәсәнова. - Башҡортостанға тимер юлы аша килеүе ихтимал. Мин уны 20 йыл элек Йылайыр совхозында, Семеновск ауылында һәм Сибайҙа күрҙем. Был ҡоролоҡҡа сыҙамлы, үҫемлектәрҙең Ҡара китабына индерелгән, тиҙ таралырға һәләтле үҫемлекте, дым булмағас, мал да ашамай.

- Яллы арпа иң беренсе 1984 йылда Белорет районында асыҡланды. Уны кемдер декоратив үҫемлек һымаҡ алып ҡайтып, баҡсаһына ултыртҡан да, ул бөтә Белорет районы буйынса таралды, - тип аңлатты биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге Ботаника баҡса-институты лабораторияһы мөдире Лариса Абрамова. - Ә Баймаҡ районына Ырымбур өлкәһенән эләгергә мөмкин. Ғөмүмән, яллы арпа тимер юлы буйлап тарала, шунан һуң ғына тораҡ пунктҡа эләгә. Баймаҡта ысын афәт, ул бөтә урамға тулған. Сибайҙа аҙыраҡ. Башҡортостандың бөтөн төбәктәрендә лә бар, шулай ҙа иң күбе - Баймаҡта.

**- Ул үтә ныҡ хәүефле иҫәпләнәме?**

- Эйе, яллы арпа хәүефле сүп үләндәренә ҡарай, әммә артыҡ зыяны юҡ, ул ағыулы түгел. Әммә шул уҡ ваҡытта беҙ уны беренсе категориялы хәүефле сүп үләне тип ҡарайбыҙ, сөнки тиҙ тарала һәм башҡа үҫемлектәрҙе юҡ итә. Уның орлоғон ел тарата, башлыса автомобиль һәм тимер юлы ситтәрендә үҫә. Уның башағы тиҙ һына һәм ҡаты урында тиҙ күсеп йөрөй. Башағында ҡылғандыҡы һымаҡ осло мыйыҡсалары булғанға ла мал ашамай уны. Уның бер файҙаһы ла юҡ, шуға күрә Башҡортостан флораһының Ҡара исемлегенә ингән.

**- Баҫыуға ҡурҡыныс янаймы?**

- Баҫыуҙа ул үҫмәй, уның баҫыуҙа үҫкәнен бер ҡасан да күргәнем юҡ. Ул, ғәҙәттә, юл ситендә, тапалған көтөүлектә, карьерҙарҙа үрсей.

**- Халыҡ әйткәнсә, яллы арпа, ысынлап та, ерҙе бетонға әйләндерәме?**

- Юҡ, улай уҡ түгел. Уның тамыр системаһы ваҡ, шулай булғас, ул тупраҡты ҡатыра алмай. Төп проблема - ул бик ҙур майҙанға таралырға мөмкин, унан башҡа унда бер нәмә лә үҫмәйәсәк, үҫемлектең башҡа төрҙәре юҡҡа сығасаҡ.

**- Кеше үҙенең участкаһында күрһә, ни эшләргә тейеш?**

- Яллы арпаны сабыу файҙаһыҙ, ул тиҙ арала үҫә һәм бик күп орлоҡлана. Әммә унан ҡотолорға мөмкин, ул тиҙ йолҡола. Шулай уҡ гербицид менән юҡ итергә мөмкин. Уның таралыуы тороһо артабан өйрәнеүҙе талап итә, йәғни уның сығанағын эҙләү, төрлө экология-география шарттарының йоғонтоһон өйрәнеү мөһим. Көньяҡ Урал биләмәһе буйынса таралыуын мониторлау кәрәк.

**"Электрогазета"нан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# СӘСӘНГӘ - ҺӘЙКӘЛ

**Ошо көндәрҙә Баймаҡ районы Иҙрис ауылында арҙаҡлы сәсән Ғәбит Арғынбаев иҫтәлегенә таҡтаташ асылды. Тантаналы сарала Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Азат Бадранов, Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Әминев, билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты.**



Арғынбаев Ғәбит Бикмөхәмәт улы 1856-1921 йылдарҙа ғүмер иткән билдәле сәсән, ҡурайсы. Ул Ырымбур губернаһының Верхнеурал өйәҙе Иҙрис ауылында, бөгөнгө Башҡортостандың Баймаҡ районы Түбәнге Иҙрис ауылында тыуған. Ҡурайҙа уйнарға Ишмөхәмәт сәсәндән өйрәнгән һәм һәр көйҙө башҡарыр алдынан уның тарихын һөйләр булған. Ғәбит сәсәндән "Урал батыр", "Күсәкбей", "Байыҡ Айҙар сәсән", "Иҙел менән Яйыҡ", "Ҡараһаҡал", "Юлай менән Салауат" кеүек ҡобайырҙар, йөҙәрләгән йыр, риүәйәттәр яҙып алынған. Уның тураһында туғанлыҡ мөнәсәбәте булған арҙаҡлы ҡурайсы, фольклорсы Юлай Ғәйнетдинов ғорурланып һөйләне.

- Баймаҡ районы халҡы, бәлки, бөтә республикала иң инициативалы граждандарҙыр. Был таҡташ нәк уларҙың тырышлығы менән асылды. Ғәбит Арғынбаев - бик үҙенсәлекле шәхес, шуға уның тураһындағы хәтирәләр мәңгелеккә һаҡланырға тейеш, - тине Азат Бадранов.

Әйткәндәй, баймаҡтар киләсәктә тағы бер күренекле яҡташтары - Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтың иҫтәлеген дә мәңгеләштерергә ниәтләй.

# ӘҮҘЕМ АУЫЛ ҠАЙҘА?



**"Юлдаш" радиоһы йыш ҡына тыңлаусылары араһында төрлө бәйгеләр, конкурстар үткәрә. Уларҙың һуңғыһы бөтә республикала резонанс тыуҙырҙы, сөнки Башҡортостандың иң әүҙем ауылын асыҡлау ойошторолғайны.**

Бәйгегә 30-ҙан ашыу ауыл ҡушылды, уларҙан 7-һе финалға үтте. Районға район ҡаршы торған көсөргәнешле бәйгелә Әбйәлил районы Күсем ауылы еңеп сыҡты һәм радионан эксклюзив бүләк отто. Советтар Союзы Геройы, генерал-майор Таһир Кусимовтың тыуған ауылына "Юлдаш"тар махсус пьеса яҙып, үҙҙәре сәхнәләштергән спектакль алып барҙы.

Коллектив көн дә 24 сәғәт эфир уҙғарған арала ике ай дауамында "Буран ФМ" тип аталған спектакль әҙерләп, уны Күсем ауылы клубында халыҡ хөкөмөнә сығарҙы. Ул мөхәббәт, тоғролоҡ һәм ябай кешеләр яҙмышында "Юлдаш" радиоһының роле тураһында. Пьесаның авторы - йәш алып барыусы А.Сәсәнбаев, спектаклгә көйҙәрҙе композитор Р. Арыҫланов яҙҙы, сәхнәгә ҡуйыусы режиссер - З.Лира, ролдәрҙе төрлө бүлек мөхәррирҙәре, реклама һәм СММ белгестәре, алып барыусылар, тауыш режиссерҙары башҡарҙы.

Күсем ауылы халҡы "Юлдаш" тамашаһын ғына алҡышлап ҡалманы, иң әүҙем ауыл икәнлеген иҫбатлап, бейеү һәм фольклор ансамблдәре сығышын, спортсылар күнекмәләрен, ауылдарының данлыҡлы музейын, мәсетен, мәктәбен күрһәтте, йәйләүҙә ҡунаҡтарға самауыр сәйе эсерҙе, йолаһына тура килтереп, төрлө милли ризыҡтарҙан ауыҙ иттерҙе, дискотекала бейетте, тауға күтәрелеп, данлыҡлы күлдәрен, далаларын байҡатты. Әбйәлилдә рухланған, илһам алған коллектив спектаклдә Өфө тамашасыһына күрһәтергә тигән хыял менән ҡайтты.

"Тыңлаусыбыҙға мөмкин тиклем яҡын булыу, уның менән бәйләнеште нығыта барыу, шулай уҡ "Юлдаш" радиоһында эшләүселәрҙең башҡа һәләттәрен дә асыу һәм танытыу йәһәтенән беҙ заманға ярашлы бөтә алымдарҙы ла ҡулланып ҡарайбыҙ. Спектакль яҙыу һәм уны сәхнәләштереү шундай маҡсаттарҙың береһе ине. Тамашасының уны ихлас ҡабул итеүе бик ҡыуандырҙы, был тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ проекттарға тотоноррға этәргес булыр", - ти Башҡортостан юлдаш каналы етәксеһенең радиотапшырыуҙар буйынса урынбаҫары Тәнзилә Үлмәсбаева.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ҠУРСАҠТАРҒА...

## милли кейем кейҙерә

**Бөгөнгө замандың булдыҡлы ҡатын-ҡыҙы бөтә эшкә лә өлгөрә: донъяһын да ҡарай, балалар ҙа үҫтерә, күңеленә яҡтан шөғөлөнә лә ваҡыт таба.**



Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе уңған хужабикә, ете бала тәрбиәләүсе әсә Гүзәл Юлмәтова ла тап шундай егәрләләрҙең береһе. Ҡул эштәренә маһирлығы бала сағынан килә. Бөгөн ул ҡурсаҡтарға милли кейемдәр тегеү менән мауыға.

- Ҡурсаҡтарҙы төрлө ерҙән йыям мин. Балаларҙы үҫеп, уларҙың кәрәге ҡалмаһас, кешеләр сығарып ташлағандары ла бик ярап ҡала, таныш-тоноштарҙың ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәрен дә йәһәт кенә эләктерә һалам, - тип йылмая Гүзәл.

Үҙебеҙҙең милли кейем кейгән ҡурсаҡтарҙың һәр ҡайһыһын ҡулыма алам да, уларға кейем тегеүҙең ни тиклем сабырлыҡ талап иткән нескә эш икәнен аңлайым. Етмәһә, оҫта ханым уларға төрлө төҫтәге ваҡ ҡына сәйләнде, мәрйендәр ҡулланып биҙәүестәр ҙә яһай. Төҫ-башы уҡ башҡорт ҡыҙына тартып торған балитәкле күлдәктәгеһенең һаҡалын, ҡашмауын эшләү ҙә бары тик Гүзәл кеүек түҙемле кешенең генә ҡулынан килә торған шөғөлдәр, тип уйлап ҡуям.

Уның үҙ күңеле өсөн генә башланған эше башҡаларға ла бик оҡшап ҡала, ҡурсаҡтарға милли кейемдәрҙе төрлө саралар өсөн махсус тектергәндәр ҙә, әҙер ҡурсаҡтарҙы һатып алғандар ҙа бар. Бөгөн күберәк балалар баҡсаларынан заказдар ҡабул итә оҫтабикә. Был да аҙмы-күпме аҡса эшләү өсөн бына тигән көсөп!

- Ҡурсаҡтарға кейем тегеүгә тотоноуымды бала сакта уйынсыҡ етмәүгә бәйләйем. Беҙ үҫкәндә улар хәҙерге кеүек магазиндарҙа тулып ятманы бит, ҡытлыҡ заман ине. Уларға ябай күлдәктәр түгел, милли кейемдәр тегеү күңелемә ниндәйҙер тыныслыҡ һәм бөтөнлөк бирә, - ти әңгәмәсем, шөғөлө хаҡында һөйләгәндә.

Һатып алыусыларҙың теләге буйынса, ҡурсаҡтарын башҡа милләт кейемдәренә лә кейендерә Гүзәл. Ҡупшыҡайҙарының барыһын да ярата оҫтабикә, ә шулай ҙа күңеленә үҙебеҙҙең милли кейемдәгеләре яҡыныраҡ икән...

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САБЫРҺЫҘҒА...

## дәүләт ҡунмай

Ханды Хоҙай ораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр. Байҙы Хоҙай ораһы булһа, дәүләтенә маһайыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Байлыҡ кешеләрҙе үҙгәртмәй, бары тик уның битлеген систерә.

**(Теджа Забр).**

Ерҙән йондоҙҙарға тиклем еңел юл юҡ.

**(Сенека).**

Үҙ һүҙле алйотто еңергә тырышма, ундай кеше юҡ.

**(Бхатрихари).**

Идара итеү - өҫтөнлөк түгел, ул бурыс һәм намыҫ.

**(Андре Моруа).**

Азатлыҡ закондарҙың эсендә генә йәшәй.

**(Освальд Шпенглер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер батша йәшәгән. Уны балалары, тимәк, вариҫтары булмауы бик борсоған. Берҙән-бер көндө ул берәй баланы йә йәш кешене уллыҡҡа алырға ҡарар итә һәм вәзиренә былай ти: "Ҡапҡаларҙы шар асыҡ ҡуй. Иртәнән киҫкә тиклем минең һарайыма кем телəй, шул килһен. Килгән бер кешене ваннала йыуынлыр, яңы кейемдәр кейендер һәм ашат, ял иттер - музыка тыңлаһын, бейеүселәр сығышын ҡараһын. Ул кешеләр минең эргәмә таҙа, туҡ, матур кейемдә, яҡшы кәйефтә инергә тейеш. Кеме оҡшай, шуны уллыҡҡа алырмын..."**

**Вәзир батша ҡушҡанды еренә еткереп үтәй. Батшаның тәҡдиме менән ҡыҙыҡһынып, уның саҡырыуынан үҙенә ниндәйҙер файҙа алырға өмөтләнеп, ҡаланан бик күп кешеләр килә. Улар ваннала йыуына, ҡайһылары бассейнда йөҙә, кемелер ванналағы һабын күбеген өйөнә алып ҡайтыр өсөн кеҫәһенә йәшерә. Ашарға ултырғас та барыһы ла өҫтәлдәге аҙыҡ-түлекте кеҫәһенә, муксайына тултыра, ҡаптарға төрә башлай. Артабан килгән кешеләр ҡумаҡлап музыка тыңлап, бейеүселәрҙең сығыштарын ҡарап ултыралар ҙа, дәррәү күтәрелеп, ҡайтыу яғына ыңғайлайҙар. Уларҙы иһә батша һарайында башҡа бер нәмә лә ҡыҙыҡһындырмай булып сыға. Кисен батша вәзиренән: "Нимә булды? Һарайыма бик күп кеше йыйылғайны, ниңә минең эргәгә береһе лә инмәй?"- тип һорай. "Беҙ үҙебеҙ ҙә бер ни ҙә аңламайбыҙ, - ти вәзир. - Беҙ барыһын да һеҙ әйткәнсә эшләнек, барыһына ла ҡәҙерхөрмәт күрһәттек, барыһын да һеҙҙең эргәгә инерлек итеп әҙерләнек, әммә улар һарайҙа күргән бар нәмәне үҙҙәре менән алып, өйҙәренә таралышты..." Һығымта: маҡсатҡа табан барған юлда маҡсаттың үҙе онотолоусан була шул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

*Ҡул ҡуйыу ваҡыты -*
29 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 941